*Бер аҡһаҡалдан: "Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?" - тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуап биргән аҡһаҡал.*

*(Су Дун-По).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№24 (390)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

### Федерализмһыҙ федерация,



йәки Унитаристар ни көсәй?

2

### Башҡорт теле - дәүләт теле,



уға дәүләт ҡурсалауы фарыҙ

6

### Хөкөм итергә ҡабаланмағыҙ,



әле Аллаһы Тәғәлә бар бит әле...

8-9

### Тәбиғәт балаһы беҙ,



шулай булып ҡалайыҡ

11

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы кеүек оло йыйылыныбыҙҙың тарихи әһәмиәтен низә күрәһегеҙ?

***Кәҙим АРАЛБАЙ, БР Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:***

- Башҡорт халҡының алдынғы ҡарашлы зыялылары тарафынан ойошторолған тәүге ҡоролтайҙар рус инҡилабы осоронда милләттең идеологик-сәйәси үҙәгенә әйләнеп, Рәсәйҙең беренсе автономияһына нигеҙ һала. Халҡыбыҙҙың милли үҙаңын тергеҙеү, уны үҙ азатлығы өсөн көрәш юлына сығарыуҙа ошо ҡоролтайҙар этәргес көс була. 90-сы йылдарҙа халҡыбыҙҙы туплауҙың ошо формаһы ҡайтанан тергеҙелде. XXI быуат башында уҙғарылған Өсөнсө ҡоролтайҙы ла халҡыбыҙҙың үҙ аллылығын, милли булмышын яҡлау һәм һаҡлау хәрәкәтенең дауамы итеп ҡарарға кәрәк. Сәйәси ситуация үҙгәреүен иҫәпкә алып, беҙ яңы маҡсаттар ҡуйырға бурыслыбыҙ. Мәҫәлән, башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ хоҡуҡи статусы нығытылды, әммә уны үҫтереүҙе яңы йөкмәткеле ғәмәлдәр менән бойомға ашырыу фарыҙ. Башҡорт телен ғаилә теленә әйләндерә алмаһаҡ, уның дәүләт теле булараҡ та абруйын күтәреү мөмкин булмаясаҡ.

***Зөфәр ЕНИКЕЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты:***

- Оло йыйындарҙа иң әүәл сәйәси мәсьәләләр ҡаралған. Башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыуы ла йыйындар ҡарарына ярашлы хәл ителгән. Ер биләмәләренең сиктәрен билдәләү булһынмы, хөкөм ҡарары сығарыуымы, башҡа хоҡуҡи мәсьәләләрҙе хәл итеүме, ихтилалға күтәрелеүме - былар барыһы ла оло йыйындар ҡарамағына сығарылып, халыҡ әйткәнсә, бүректе уртаға һалып башҡарылған. Үҙгәртеп ҡороу, илде демократлаштырыу йылдарында ошо боронғо традициябыҙ тергеҙелде лә инде. Өсөнсө ҡоролтай трибунаһына ла халыҡ яҙмышы өсөн үтә мөһим мәсьәләләр сығарыласаҡ. Федерализм үҫеше буйынса үҙем ҡатнашҡан секция эшендә Башҡортостан дәүләтселегенә өсөн генә түгел, бөтөн Рәсәйҙең федератив дәүләт булараҡ киләсәк яҙмышы өсөн дә уғата әһәмиәтле проблемалар тикшереләсәк. Ғөмүмән, федерализм - донъя кимәлендәге әһәмиәткә эйә булған хоҡуҡи-сәйәси күренеш, һәм беҙ, башҡорт халҡы вәкилдәре, үҙебеҙҙең ҡоролтайыбыҙҙа Рәсәй федерализмын нығытыуға йүнәлтелгән ҡарарҙар сығарып, артабан уларҙы ил парламенты аша ғәмәлгә ашырыу буйынса ла сара күрергә тейешбеҙ.

***Спартак ИЛЬЯСОВ, ҡоролтай делегаты:***

- Иң элгәре ҡоролтайыбыҙҙа Рәсәйҙең дәүләт ҡоролошоныҫын федерализм принциптарына ярашлы үҙгәртеү маҡсатында эш алып барыу тураһында ҡарарҙар ҡабул итеү мөһим. Ни өсөн? Бөгөн Федераль үҙәк үҙе үк федерализм ҡанундарын инҡар итеүсе ғәмәлдәрҙе хуп күрә. Ниндәй генә Федераль закондарҙы алып ҡарама - ер мөнәсәбәттәрен көйләү, ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу хаҡындамы ул, "Һыу кодексы"на ҡағылғанды рынмы, дәүләттең власть вәкәләттәрен бүлешеү тураһындағынмы, мәғариф өлкәһе буйынса ҡабул ителгәндәренме - уларҙың барыһында ла үҙенең тарихи ерендә йәшәүсе милләттәрҙең хоҡуҡтары ҡыҫыла, йәиһә бөтөнләйгә иғтибарға алынмай.

Хатта батша Рәсәйендә лә аяуһыҙ баҫымға дусар ителеүгә ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланып килде, ә бөгөн халҡыбыҙ үҙ еренә үҙе хужа түгел. Тимәк, был хаҡта халҡыбыҙ үҙ дәғүәһен Федераль үҙәккә еткереп, законлы талаптарын үтәүҙе ҡәтғи рәүештә белдерһә, ошо өлкәлә алға китешкә өлгәшер инек. Был ҡоролтайыбыҙҙың бәҫен бермә-бер күтәрер ине. Беҙ халыҡ булараҡ ошо ерҙә бар булғанбыҙ, унан бер ҡайҙа ла китергә йыйынмайбыҙ, ошонда мәңге йәшәйәсәкбеҙ. Беҙ бер ҡасан да федерализмға, тимәк, Рәсәйгә ҡаршы сығыусылар менән бер рәткә баҫмаясаҡбыҙ. Өсөнсө ҡоролтай делегаттары ошолар хаҡында ҡыйыу рәүештә сығыш яһап, ошо юҫыҡта үҙгәрештәргә юл аса, үҙенең тарихи ролен үтәйәсәгенә шик булмаҫ.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



**Донъяға яралғандан бирле эйәр өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән, шуға күрә уны ҡуҙғатыр өсөн дә бейеүебеҙҙә тояҡ тауышы ишетелергә тейеш. Ат тояғы тауышы ишетелдеме - башҡорттоң да йөрәге дөпөлдәп, ҡупҡалйый башлай. Ә инде йөрәге ҡупҡалйыған башҡорттоң ҡаршыһында кәртә юҡ. Бейеүебеҙгә, дини тәриҡәттәге кеүек үк, тәбиғәттән булмышыбыҙға һалынған көс-ҡөҙрәтте уятыу, дәрт-дарманды ҡуҙғатыу, милли рухты уятыу, милләтте бер йоҙроҡҡа туплау, ойоштороу механизмы һалынған. Шуға күрә ғәмдәребеҙ уяу булһын өсөн дә бейейек. Мәғәнәһеҙ итеп һикерәндәмәйек, үҙебеҙсә һыңҡылдата баҫып, табан янғансы, үс ҡанғансы бейеүгә ни етә...**

ЗАУЫҠ

## БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫНА

Ил әләмен осар ҡанат итеп,
Ер шарынан еләә Аҡбуҙ-тай.
Урал батыр, ана, оран һала:
Йыйыл, башҡорт, гөрлә, Ҡоролтай!

Киңәйгәндәй булды Ағиҙелкәй,
Ҙурайғандай мәғрур Уралтау.
Ҡурай моңо күк-йыһанды иңләй,
Башҡорттарым йыйғас Ҡоролтай.

Тарих һандалында сыныҡҡандыр,
Халҡым рухы булат ҡоростай.
Изге ерен, телен, динен һаҡлар
Башҡорттарым йыйған Ҡоролтай.

Еркәйем дә йәшел, һыуҙарым аҡ,
Зәңгәр күктә балҡый ҡояшҡай.
Күп быуаттар үтер, халҡым йәшәр,
Башҡорттарым йыйыр Ҡоролтай!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## КҮРЕШЕРГӘ ҺУҘ УСЫҢДЫ...

Миллионлаған башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Әле һаман беҙҙең баш осонда
Яуыз көстәр төйнәй йоҙороҡ!

Беҙ бит, Рәсәй, һиңә тоғро ҡалдыҡ,
Тоғролоҡҡа тарих өйрәтте.
Туған күреп беҙгә ус һуҙғанда
Беҙ һуҙабыҙ һиңә йөрәкте!

Миллионлаған башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Һинең ҡулыңдағы бармаҡтар беҙ,
Бармаҡтарҙан төймә йоҙороҡ.

Бер бөртөгө уның һыҙлаһа ла,
Ауыртырға тейеш бөтә ҡул!
Нисек инде һинең ҡул суҡтарың
Берәһе иптәш булһын, берәһе - ҡол?

Беҙ бит,Рәсәй, һиңә тоғро ҡалдыҡ!
Был ерҙәме, ситтә, алыҫта
Күпме аҫыл ирҙәр башын һалды?!
Барыһы ла һинең намыҫта!

Бар милләттәр һине туған күреп,
Йәшәһендәр, тиһәң, дуҫ булып...
Бөйөк Рәсәй! Бармаҡтарың торһон
Күрешергә һуҙған ус булып!

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**



ИШАРА

# ФЕДЕРАЛИЗМҺЫҘ ФЕДЕРАЦИЯ,

## йәки Унитаристар ни көҫәй?



**Беҙ революцияға тиклемге Рәсәйҙе батша Россияһы, совет осорондағыһын - РСФСР, хәҙергеһен Рәсәй Федерацияһы, ҡыҫҡартып Рәсәй, тип атайбыҙ. 1917 йылдан алып быуатҡа яҡын арауыҡта илебеҙ ҡоролошонда төп мәғәнә аңлатҡан урынды "федерация" һүҙе биләһә лә, ысын-ысындан федерализм күренеше беҙҙә булдымы икән? Совет осоронда федерализм принцибы коммунистар партияһы диктатураһы, хәҙер инде авторитаризм һәм унитаризм менән алмашынды. Ни өсөн Рәсәй властары илдең именлегенә, бөтөнлөгөнә ҡурҡыныс янағанда ғына "федерация" һүҙен иҫенә төшөрә һуң?**

Әйтәйек, Владимир Ленинға ниңә кәрәк булған һуң яңы Рәсәйҙең федераль дәүләт булып ойошоуы? Ниңә кәрәк булған уға РСФСР, йәғни аҙ һанлы халыҡтарҙың автономияһы? Элекке Рус батшалығы составында йәшәгән ул халыҡтарҙы шул тиклем ятраҡанмы, уларҙың донъяла йәшәүен шул тиклем теләгәнме ни Владимир Ильич? Әлбиттә, юҡ. Сөнки Рәсәй батшалығы эңерендә илебеҙ тышҡы яҡтан интервенттар менән уратып алынғанда, эске яҡта туған туғанды һуйған граждандар һуғышы барғанда, ил халыҡтарының тормошо иң һуңғы сиккә килеп терәлгәндә, анархия закондары, "линч судтары" хөкөм һөргәндә Рәсәйҙе дәүләт булараҡ һаҡлап ҡалыуҙың, бер йоҙроҡҡа туплауҙың берҙән-бер юлы булған бит федерация төҙөү. Ошо осорҙа дәүләтселек аңы борон-борондан ҡанында булған башҡорттар үҙ ғәскәрен төҙөп, үҙ хоҡуҡтары өсөн ҡулына ҡорал тотоп көрәш башлай. Төрлө сығанаҡтар буйынса ҡарағанда, 1917 йылдан алып 1924 йылға тиклем хәрәкәт иткән башҡорт ғәскәрҙәренең һаны 50 меңгә еткән. Бик ҙур көс. Был һиңә, Бабич әйткәнсә, кемдеңдер "ҡыуыҡ мылтыҡ" атып ятыуы түгел. Рәсәй күкрәгенең йөрәге Питер бына-бына тибеүҙән туҡтарға торғанда кәрәк була ла инде Ленинға башҡорт ғәскәре. Әммә уның ысын йөҙө шундуҡ асыла: автономия хаҡында Совет хөкүмәте менән килешеүҙе Ильич "ҡағыҙ киҫәге" тип атай һәм Әхмәтзәки Вәлиди сит илгә сығып китергә мәжбүр була. Шулай итеп, федерализм һанаулы ғына көндәр ҡағыҙҙа ғына йәшәп өлгөрә.

Ошо урында икенсе бер урынлы һорау тыуа: кем-кем, Ильичтың вариҫы - илебеҙҙе интеллектуаль һәм физик яҡтан ҡыйратҡан "халыҡтар атаһы" Сталиндың РСФСР составындағы автономиялы республикаларҙың хоҡуҡтарын рәсми яҡтан юҡ итергә баҙнат итмәүенең сәбәптәре ниҙә һуң? Ғөмүмән, ике грузин кешеһенең - Сталин менән Берияның үҙҙәренең иле, уның миллионлаған граждандары яҙмышы менән "уҫал шаярыуына" нисек түҙҙе икән илебеҙҙең аҫыл улдары? Бар нәмә ҡулынан килгән Сталиндың Рәсәй автономияларына оронмауының төп сәбәбе барыбер ҙә уның милләтенә бәйлелер. Был юл Сталин өсөн күпселекте рус милләтле граждандар тәшкил иткән илдең башлығы булараҡ үҙен инҡар итеү ҙә булыр ине, тип уйланыла...

Ярай, хуш, хәҙер инде Советтар Союзы эңеренә киләйек. Ул саҡта СССР-ҙың союздаш республикалары Мәскәүҙән йөҙ сөйгәндә Рәсәйҙең беренсе президенты Борис Ельцин юғары трибунан тороп: "Суверенитетты йота алғансы алығыҙ", - тип белдерҙе. Тарих ҡабатланды. Ельцин да Ленинды ҡабатланы, йәғни илде һаҡлап ҡалыр өсөн федерация һүҙен иҫенә төшөрҙө. Ул да Ленин һымаҡ был юлға барырға мәжбүр булды. Әммә беҙ Ленин беҙҙең менән килешеүгә ҡул ҡуйғандан һуң да, Ельцин беҙгә "һоғондорғандан" һуң да ысын федерализм принциптары хөкөм һөргән илдә йәшәнекме икән? Рәсәй Конституцияһының 65-се статьяһынан башлап тағы ла бик күптәрендә беҙҙең статус һәм хоҡуҡтарыбыҙ аҡҡа ҡара менән яҙылған. Ғәмәлдә Дәүләт Думаһында көндән-көн күпселекте тәшкил итә барыусы фирҡә ағзалары илдең төп законына ҡаршы эшләй. Ленидың "ҡағыҙ киҫәге" һүҙе "власть вертикале" тигән һүҙ менән алмашынды ла алмашыныуға, тик белгестәр фекеренсә, вертикалде урынлаштырыу өсөн илдең әлеге бюджеты кимәлендә сығымдар кәрәк икән. Тимәк, "власть вертикале"н дә ҡоро һүҙҙәр генә тип аңларға була. Хатта ки милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн бүленгән миллиард һумдарҙың адресатҡа барып етеүен дә тәьмин итә алманы беҙҙең власть вертикале.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәйҙең власть даирәләре, теләйме-юҡмы, әгәр ҙә киләсәктә дәүләт булараҡ һаҡланып ҡалырға теләһә, үҙ конституцияһындағы федерализм принциптарын тулыһынса танырға мәжбүр буласаҡ. Дөрөҫөрәге, донъя йәмәғәтселеге уны мәжбүр итәсәк. Әлегә төрлө юлдар менән власть структураларына, Дәүләт Думаһына, Федерация Советына үткән ала ҡараҡтар - олигархтар теше-тырнағы менән унитаризмды яҡлап маташа. Улар әлегә Рәсәйҙең һатылмай ҡалған берҙән-бер байлығы булған ерен донъя капиталына йоғондормаҡсы, ошо юл менән Рәсәйҙе юҡ итмәксе. Әйткәндәй, Германия - федератив дәүләт иҫәпләнеп, уның составына 16 субъект ҡарай. Уларҙы Ер (Земля) тип атайҙар. Ысын федерализм принциптары менән йәшәгән федератив дәүләт, ана нисек, һәр субъектының ергә хоҡуғын уның атамаһы менән нығытҡан. Рәсәй яҡын киләсәктә Евросоюзға инергә ниәтләй икән, федерация составындағы һәр субъектына ла ошондай уҡ мөнәсәбәттә генә был союздың тулы хоҡуҡлы ағзаһы була ала. Рәсәйҙең башҡа юлы юҡ.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 июндән республикала балаларҙың сәләмәтлеген нығытыу һәм йәйге ялын ойоштороу кампанияһы башланды. БР Хөкүмәте ултырышында Раил Сарбаев әйтеүенсә, әлеге көндә 100 меңдән ашыу бала 2234 ял һәм һауыҡтырыу учреждениеһына урынлаштырылған. Быйыл балаларҙың йәйге ялын ойоштороу өсөн республика бюджетынан 930,3 млн һум аҡса бүлеү ҡаралған. БР Мәғариф министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда балаларҙы көндөҙгө ялға ҡабул итеүсе 1 мең 718 лагерь эшләйәсәк, уларҙа 106 меңдән ашыу бала ял итәсәк.

✓Быйыл I кварталда Рәсәй Страховкалау фондының БР буйынса төбәк бүлексәһенә "Тыуыу сертификаты" программаһы буйынса 91 миллион һумдан ашыу аҡса күсерелгән. Был сумманың 24 миллион 840 мең һумы - ҡатын-ҡыҙ консультацияларынан, 50 миллион 592 мең һумы - бала табыу йорттарынан, 15 миллион 583 мең һумы балалар поликлиникаларынан килгән. Алынған аҡса медицина персоналының хеҙмәтен түләүгә, дауалау-иҫкәртеү учреждениеларының матди-техник базаһын нығытыуға йүнәлтелгән. Быларҙың бөтәһе лә ауырлы ҡатындарҙы һәм яңы тыуған сабыйҙарҙы хеҙмәтләндереүгә ыңғай йоғонто яһаған.

✓Киләһе йылда Өфөлә яңы биҫтә барлыҡҡа киләсәк - ҡаланың Дим районы эргәһендәге ике күл араһында торлаҡ комплексы төҙөү күҙаллана. Буласаҡ төҙөлөш урынын Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов, БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡараны. "Кустаревский" тип аталасаҡ яңы микрорайонда 20 мең самаһы кеше йәшәйәсәк. Яңы районда социаль инфраструктура ла уйланылған - ете балалар баҡсаһы, дүрт мәктәп асыласаҡ, фитнес-зал һәм ике спорт комплексы буласаҡ.

✓Роспотребнадзорҙың БР буйынса идаралығында хәбәр итеүҙәренсә, республикала талпан ҡаҙалыуҙан 6915 кеше зыян күргән. Уларҙың 28 проценты - балалар. "Башҡортостан Республикаһында гигиена һәм эпидемиология үҙәге" учреждениеһы 1 апрелдән 3424 талпанды тикшергән һәм 58 бөжәктең талпан энцефалиты вирусы менән зарарланыуын асыҡлаған. Әле Башҡортостанда был вирустан зыян күреүселәр теркәлмәгән.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# НИНДӘЙ ДӘҮЛӘТ ҠОРОЛОШО КӘРӘК БЕҘГӘ?

## Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул итеүгә 20 йыл тулыу айҡанлы уйланыуҙар

**Рәсәй көнө тип аталған байрам алдынан беҙҙең илдә, ғәҙәттә, матур, яңғырауыҡлы һүҙҙәр һөйләйҙәр. Әйтәйек, демократия тураһында. Йәки төрлө азатлыҡтар һәм хоҡуҡтар хаҡында. Һүҙ, йәки митингылар һәм демонстрациялар азатлығы, кеше һәм граждандар хоҡуҡтары тураһында. Ни эшләйһең инде, ябай байрам түгел бит. Шулай булырға тейештәр.**

Ғөмүмән, илебеҙҙә хәҙер демократия тип ауыҙ асыр өсөн ике байрам бар. Береһе, 12 июнь, йәғни, Рәсәй Федерацияһының суверенитеты тураһындағы Декларацияны ҡабул итеү көнө. Икенсеһе, 12 декабрь, Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы көнө. Ярты йылға бер тапҡыр дәүләт әһелдәренең ауыҙынан "демократия", "азатлыҡ", "кеше һәм граждан хоҡуҡтары" тигән һәм башҡа ошондайыраҡ һүҙҙәр яңғырай. Башҡа көндәрҙә ләм-мим. Хәйер, шулай кәрәктер. Сөнки көн һайын "демократия" тип ҡысҡырып ултырыуҙан тамаҡ туймаясаҡ, ил алға китмәйәсәк бит. Ана, Владимир Владимирович Путин май аҙағында Санкт-Петербургта ижади интеллигенция төркөмө, йәғни, мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәре менән осрашҡанда "демократия" тип ауыҙ асҡан Юрий Шевчукты хатта таныманы. Башҡаларҙы вис белеп ихтирам итеп аталарының исемен ҡушып тороп өндәшә. Ә быға тәүҙә: "Ә һеҙ кем ул?" - тигәйне, артабан иһә "Юра" тип кенә һүҙ ҡушты. Әллә уны үтә яҡын күреп шулайттымы?

Ғәфү, йәмәғәт, ситләштем, буғай. Һүҙем Декларация хаҡында ине бит әле. Байрам алдынан асып ҡараным ул документты. Юғиһә, уны ҡабул итеү көнөн оло тантанаға әүерелдерҙек - йырлайбыҙ, бейейбеҙ, күккә салют атабыҙ. Ә унда нимә яҙылғанын бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ микән? Ҡыҙыҡ ҡына һүҙҙәр яҙылған икән. Мәҫәлән, Декларацияның 4-се пунктында "Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенитеты юғары маҡсаттарға өлгәшеү - һәр бер кешенең лайыҡлы тормошҡа, тыуған тел менән иркле рәүештә аралашыуға һәм уны үҫтереүгә, ә һәр бер халыҡтың - ул үҙе һайлап алған милли-мәҙәни йәки милли-дәүләт формаларында үҙбилдәләнешкә тартып алғыһыҙ хоҡуҡтарын тәьмин итеү өсөн иғлан ителә", тиелә. Тимәк, бөгөн Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы индергән белем биреүҙең федераль стандарты Декларацияға ҡаршы килә булып сығамы? Был осраҡта ҡайһы документ өҫтөнлөк итә икән? Декларациямы, әллә Министрлыҡтың нормативтарымы?

Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ - Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында "Рәсәй Федерацияһы һәм Рәсәй атамалары бер тигеҙҙәр һәм бер үк мәғәнәгә эйә" тиелә. Әммә Конституцияның бер генә пунктында ла Рәсәй тигән һүҙ ҡулланылмай. Документтың башынан аҙағынаса ауыҙ тултырып "Рәсәй Федерацияһы" тип әйтелә. Бик хуп, бик мәслихәт, тиерһегеҙ. Илебеҙҙең исеме дөрөҫ булғас, есеме лә уға тура килер, тип әйтерһегеҙ, моғайын. Ҡыуанырға ашыҡмағыҙ. "Федерация" һүҙе закондарҙа ғына ҡалып бара. Һәм тағы ла төбәктәрҙә көндән-көн күбәйгән, әсегән ҡамыр кеүек арта барған үҙәк министрлыҡтар һәм ведомстволарҙың урындағы идаралыҡтары хаҡында һөйләгәндә "федераль" һүҙе ҡулланыла. Ә тағы ла Чечнялағы һуғыш ваҡытында Рәсәй армияһы хәрби хеҙмәткәрҙәре тураһында әйткәндә "федералдар" тигән атама яңғырай торғайны. Ғөмүмән, һуңғы арала "федераль", "федерация", "федератив" һүҙҙәренә бөтөнләй башҡа мәғәнә һалына башланы. Улар әрләү урынына яңғыраған кеүек. Ҡайһы берәүҙәр хатта "инәнден федерацияһы" тип ысҡындырыуҙан да тартынмай, имеш. Әйтәйек, "федератив ҡаҙнаға теге йәки был төбәк барлыҡ килемдәренең 75 процентын күсерә" тигәнде ишетһәң, ул һүҙ, ысынлап та, һүгенеү кеүегерәк була икән. Ә Федераль Йыйылыш һуң? Йәғни, уның юғары һәм түбәнге палаталары - Федерация Советы менән Дәүләт Думаһы? Федерация Советы төбәктәрҙең вәкилдәре ҡатнашлығында тупланырға тейеш булһа ла, олигархтарҙың һәм Совет ағзаһы статусы менән файҙаланып, бизнес менән шөғөлләнгән, Мәскәү буйлап "ялпылдаҡтар" менән сабыулап йөрөгән төрлө шикле бәндәләрҙең йыйы урынына әүерелде. Уларҙың ҡайһы берҙәре (күптәре, йәмәғәт!) үҙҙәренең төбәктәрендә булғандары ла юҡ. Федераль властың закондар сығарыу тармағы депутаттары иһә бөгөн асыҡтан-асыҡ, бер кемдән дә, хатта Президенттан да тартынмай эш урындарына, йәғни Думаның пленар ултырыштарына йөрөүҙән баш тарта. Асыҡтан-асыҡ тигәнем, тимәк, уларҙы һайлап ҡуйған халыҡтан оялмау, Дәүләт Думаһы ултырыштар залының буп-буш креслоларын видеокамераға төшөрөп, бөтә Рәсәйгә күрһәткән журналистарҙы һанға һуҡмау тигәнде аңлата. Улар үҙҙәренең ошо ҡылыҡтары менән федераль властың абруйын аяҡ аҫтына һалып тапағандарын һәм һөҙөмтәлә "федерация" һүҙенә тап төшөргәндәрен аңлайҙар микән?

Федераль власть тигәнебеҙ федерация, йәғни, тигеҙ һәм тулы хоҡуҡлы, үҙҙәренең эске мәсьәләләрен тулыһынса үҙҙәре, үҙ көстәре менән хәл иткән төбәктәрҙең берләшмәһе менән идара иткән орган булмай микән ни? Һуңғы ваҡытта, аныҡлабыраҡ әйткәндә, 2000 йылдан бирле власть органдары, ҡануниәт хаҡында "вертикаль" һүҙе йышыраҡ ҡулланыла башланы. Ҡаты вертикаль булдырылды, төбәк закондары бер ҡалыпҡа килтерелде, тигән белдереүҙәр үҙәк власть әһелдәре тарафынан йыш ҡына яңғырала. Советтар осоронда Коммунистар партияһының уставында "демократик централизм принцибы" тигән һүҙбәйләнеш осрай торғайны. Бөгөнгө "вертикаль" тап ана шул "принцип" кеүек инде. Демократия ла бар кеүек, ә асылда барыбер бөтә нәмә шул "Үҙәк"кә ҡайтып ҡала.

1990-сы йылдар башында Рәсәйҙә әле саҡ азатлыҡ елдәре иҫә башлағас, "үҙ аллылыҡ", "суверенитет" тигән һүҙҙәрҙе ҡурҡмай, ауыҙ тултырып әйтеү мөмкинлеге тыуғас, Совет мәлен һүрәтләгәндә: "Ул саҡта бәҙрәф ултыртыу өсөн дә Мәскәүҙән рөхсәт һорарға кәрәк ине", - тип һөйләй торғайнылар. Бөгөн шым ғына, һиҙҙермәй генә шул уҡ хәлгә ҡайтып барабыҙ түгелме һуң? Төбәктәрҙең күп хоҡуҡтарын төрлө сәбәп менән - "терроризм менән көрәште камиллаштырыу маҡсатындамы", һайлауҙар тураһындағы закондарҙы "тәртипкә килтереү" йәһәтенәнме, закондарҙы унификациялау (бер сафҡа баҫтырыу) "бурысынан сығыпмы", тартып алып бөттөләр. Төбәктәрҙең ваҡытында иғлан ителгән суверенитеттары хатта ҡағыҙҙа ла ҡалманы ла баһа. Урындағы халыҡ хатта төбәк менән идара иткән түрәне лә (президентмы ул әллә, төбәк башлығымы, губернатормы - мөһим түгел) асыҡтан-асыҡ һайлап ҡуя алмай. Йәғни, Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларацияла әйтелеүенсә (3-сө пунктты ҡарағыҙ), Рәсәй Федерацияһының күп милләтле халҡы "суверенитетты йөрөтөүсе һәм дәүләт власының сығанағы" була алмай. Сөнки, ул Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына ярашлы дәүләт власын туранан-тура йәки үҙенең вәкилдәре (йәғни, һайлап ҡуйған кешеләре) аша бойомға ашыра алмай. Уны бындай мөмкинлектән мәхрүм иттеләр. Тимәк, Рәсәй халҡының Декларация тарафынан иғлан ителгән, Конституцияла нығытылған хоҡуҡтары тартып алынған. Асылда бөгөн Федерациябыҙ Конституцияла раҫланған хәлендә юҡ. Төбәктәр бар әлегә, әммә уларҙа реаль мөмкинлектәр ҡалмаған. Тимәк, Декларация ла (йәғни, Рәсәй Федерацияһының хоҡуҡи нигеҙе) юҡ ителеү алдына баҫтырылған булып сығамы? Ә унан һуң сират Конституцияға ла етәсәкме?

Төбәктәргә, айырыуса ҡеүәтле иҡтисади потенциалы, милли зыялылары, тыуып килгән милли эшҡыуарҙар ҡатламы булған республикаларға ҡаршы Үҙәктән ысын мәғәнәһендәге информацион һуғыш асылыуы хаҡында бер нисә тапҡыр яҙғайным инде. Уның бер үҙәктән ойошторолоуы ла шикһеҙ. Был эштең шул иҫәптән иҡтисади юҫыҡта эшләнеүе лә көн кеүек асыҡ. Әммә эш бит төбәктәрҙәге ерҙе йәки күсемһеҙ милекте ҡулға төшөрөүҙә генә түгел. Үҙәк бер юлы бер нисә проблеманы хәл итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Әйтәйек, милли-сәйәси, шул иҫәптән, йәштәр ойошмаларының эшмәкәрлегенә аяҡ салыу - сәйәси проблемаларҙы ғына түгел, иҡтисади мәсьәләләрҙе лә хәл итә. Бер үк ваҡытта милли хәрәкәт бысраҡҡа буяла, федератив мөнәсәбәттәрҙән унитаризмға тағы ла бер аҙым яһала. Именлек хеҙмәте тарафынан тәүҙә Мари Эл республикаһында ойошторолған, шунан һуң беҙҙә ҡабатланған бер үк "сценарий" шул хаҡта һөйләй түгелме?

Ошо урында ниндәйҙер һығымта яһарға кәрәктер. Бергә торһаҡ, төбәктәр Үҙәк алдында үҙ мәсьәләләрен ҡәтғиерәк ҡуйһа, федерализмды һаҡлап алып буласаҡ, тип әйтергә мөмкин. Илебеҙ унитаризмға табан хәрәкәт итеүен дауам итәсәк, уны бер нисек тә туҡтатып булмаясаҡ, тиергә лә була. Үҙебеҙҙән тора - кәрәкме беҙгә федерация, әллә юҡмы?

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡорт дәүләт медицина университеты студенттары Һамарҙа Волга буйы федераль округы төбәктәре вуздары араһында уҙғарылған хирургия олимпиадаһында икенсе урынды яулағандан һуң, Мәскәүҙә үткән ярыштарҙа ҡатнаша. Бында ла 11 кешенән торған Башҡортостан командаһы хирургия өлкәһендәге оҫталыҡтарын күрһәтеп, икенсе урынға лайыҡ була.

✓ Республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәре былтыр бәләкәй эшҡыуарлыҡ үҫешенә һәм халыҡтың мәшғүллегенә ярҙам итеү буйынса 1159 килешеү төҙөгән, уларҙан 1134 кеше шәхси эшҡыуарлыҡҡа тотонған, 150 граждан фермер хужалығы асҡан, 25-е бәләкәй предприятие булараҡ эш башлаған. Уларҙың барыһына ла аҡса бүленгән, шул иҫәптән 35 кеше БР бюджетынан 100-әр мең һум күләмендә аҡса алған.

✓ 2009 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Рәсәйҙең кредитҡа һәләтле төбәктәре араһында етенсе урынды биләй. Рейтинг бюджетты үтәүҙең сифатлы күрһәткестәре һәм иҡтисади үҫеш параметрҙары буйынса билдәләнгән.

✓ Иҫке автомашиналарҙы утилләштереү буйынса ойошторолған дәүләт экспериментында Башҡортостан да әүҙем ҡатнаша. Мәғлүмәттәр буйынса, республикала утилләштереү тураһында 7234 таныҡлыҡ бирелгән. Рәсәй буйынса ошондай 200 мең таныҡлыҡ бирергә планлаштырылған. Республикала программа буйынса 2666 автомобиль һатылған. Ошо программаға ярашлы, ил бюджетынан тағы ла 10 миллиард һум аҡса бүленеүе көтөлә.

✓ "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары - 2010" республика конкурсы еңеүселәре билдәләнде. Быйыл был конкурсҡа йөҙ предприятие 229 төрлө продукт һәм тауар тәҡдим иткән. Конкурс лауреаттары исемлегендә "Салауатнефтеоргсинтез", Стәрлетамаҡтың "Сода" берекмәләре, "Рощинский" совхозы бар. "Хеҙмәтләндереү" номинацияһында "Башинформсвязь" берекмәһе, "Урал аръяғы" машина-технологик станцияһы, "Янғантау" санаторийы, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы айырым билдәләнгән.

✓ *Мине шундай иркен, ҙур, матур Өфө ҡалаһы ҡаршы алды. Ҡала эсендәге парктарҙы, күлдәрҙе ҡарап йөрөнөк. Башҡорт халҡы менән телдәребеҙ ҙә оҡшаш булғас, әйтерһең дә, яҡын туғандарыма килгәндәй тойҙом үҙемде.*



*БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ*

# ӘБЕЙ-БАБАЙҘАР ҘА...

## матур бында

**Быйыл ун бишенсе тапҡыр уҙған "Урал моңо - 2010" төрки йәштәренең Халыҡ-ара конкурс-фестиваленә туғандаш республикаларҙан ундан ашыу милләт вәкилдәре йыйылғайны. Уларҙың бик күптәре был сараға ғына түгел, ә Башҡортостанға тәүге тапҡыр килгән. Ошонан файҙаланып, конкурсанттарҙың Өфө ҡалаһы тураһындағы уй-фекерҙәрен, тәьҫораттарын белештек:**

**Юлиана КРИВОШАПКИНА, Саха(Яҡутстан):** Мин Өфөлә тәүге тапҡыр. Фестиваль башланырҙан бер көн алда килгәнлектән, көнө буйы ҡала менән танышырға форсат булды. Бик матур ҡала. Шул тиклем йәшеллек күп, тәбиғәте хозур был яҡтарҙың. Ҡала буйлап тағы ла күберәк сәйәхәт иткем, иҫтәлекле урындарын күргем килә.

**Марина САКСАЕВА, Алтай:** Бында беренсе тапҡыр килгәнлектән, тәьҫораттар шул тиклем күп. Мине шундай иркен, ҙур, матур Өфө ҡалаһы ҡаршы алды. Ҡала эсендәге парктарҙы, күлдәрҙе ҡарап йөрөнөк. Башҡорт халҡы менән телдәребеҙ ҙә оҡшаш булғас, әйтерһең дә, яҡын туғандарыма килгәндәй тойҙом үҙемде. Шундай ихлас, ҡунаҡсыл һәм матур халыҡ йәшәй бында. Ошо күркәм башҡорт ере һәм уның халҡы именлектә йәшәһен, тип теләге килә.

**Айнара ТОЛУБАЕВА, Дағстан:** Өфө - заманса тәҙәкләндерелгән бик матур ҡала. Бындағы йәшеллек, йылғалар, саф һауа - барыһы ла илһамландыра, рухландыра. Мин үҙем шағирә булараҡ быларға тыныс ҡына ҡарай алмайым, күңелдә әллә күпме хистойғолар биләп алды. Башҡортостанда шундай асыҡ күңелле, ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй. Дағстанда йәшәүсе нуғай халҡымдан ҡайнар сәләмемде еткерәм.

**"Яңы Азия" төркөмө йырсыһы АЙҘАР, Алтай:** Өфө ҡалаһының матурлығына хайран ҡалдым. Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев һәйкәле бик оҡшаны. Салауат Юлаевтың Пугачевтың көрәштәше икәнлеген, илен, милләтен яҡлап, барлыҡ халыҡты күтәрерлек көскә һәм абруйға эйә булыуы тураһында уҡып беләм. Өфө ҡыҙҙары ла бик сибәр икән.

**Нургөл МУСУЛИМОВА, Ҡаҙағстан:** Өфө, Башҡортостан тураһында ишеткәнем бар ине, әммә уны былай тәҙәк һәм йәшеллеккә күмелгән, тип күҙ алдына килтермәй инем. Башҡортостан йәштәре беҙҙәң йәштәрҙән айырылмай, ә бына әбей һәм бабайҙарығыҙ бигерәк матур икән. Ҡунаҡсыл халыҡтың аш-һыуы ла тәмле.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ТӨП УҠЫУ ЙОРТО...

## классик белем алырға саҡыра



**Башҡорт дәүләт университетында абитуриенттар һәм уларҙың атаәсәләре өсөн "БДУ дуҫтарын йыя" тип аталған сара уҙҙы. Ғәҙәти асыҡ ишектәр көнөнә оҡшамаған был байрамда уҡыу йортоноң бөтә факультеттары менән бер юлы танышырға, үҙенде ҡыҙыҡһындырған һөрауҙарға яуап алырға, хатта Ҡара диңгеҙгә путевка оторға мөмкин булды. Ошо сара сиктәрендә БДУ ректоры Әхәт Ғәзизйән улы МОСТАФИН журналистар менән дә осрашты.**

- Классик белем бөтә донъяла иң яҡшыһы һанала. Бындай белем йәш кешегә Башҡортостанда ғына түгел, ә унан ситтә лә төрлө йүнәлештәрҙә эшләргә мөмкинлек бирә. Шуға ла беҙ классик белемгә эйә булырға теләүселәрҙе Башҡорт дәүләт университетына уҡырға саҡырабыҙ, - тине Әхәт Ғәзизйән улы. - Уҡыу йортонор үҫеш перспективалары тураһында һүҙ алып барғанда, бөгөн беҙҙең төп маҡсатыбыҙ - БДУ базаһында милли тикшеренеү университеты төҙөү. Студент үҙе фән менән шөғөлләнгәндә генә сифатлы белемгә эйә була ала.

Вуз етәксеһе студенттар һәм уҡытыусыларҙың башҡорт филологияһы, тарих, тыуған яҡты өйрәнеү өлкәләрендәге уңыштарын билдәләп, артабан тәбиғи фәндәргә иғтибарҙы күберәк бүлергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әлбиттә, йәҙ йыллыҡ тарихы булған уҡыу йортонда был йүнәлештә байтаҡ эштәр башҡарылған, бигерәк тә нанотехнологиялар өлкәһендә ҡыҙыҡлы ғилми проекттар күп. Бынан тыш, мөһим йүнәлештәрҙең береһе булған иҡтисад өлкәһе лә яңырыуҙар көтә. Киләсәктә БДУ абитуриенттарға культурология, химик технологиялар кеүек яңы бүлектәр ҙә тәҡдим итмәксе. РФ Мәғариф һәм фән министрлығы ҡарарына ярашлы, гуманитар факультеттарға бюджет урындар йылдан-йыл аҙайыу сәбәпле, гуманитар йүнәлеште төрләләндереү мөһимлеген дә билдәләп китте Әхәт Мостафин.

2011 йылдан бөтә вуздар ике кимәлле белем биреүгә күсеү сәбәпле, уҡыу йорттарына халыҡ-ара бәйләнеш өлкәһендә яңы мөмкинлектәр асыла. Был бигерәк тә фән үҫешенә яҡшы этәргес буласаҡ. БДУ әле үк төрлө уҡыу йорттары араһында студенттар, уҡытыусылар менән алмашыуҙа әүҙем ҡатнаша. Яңыраҡ Төркиә һәм Ҡытай университеттары менән килешеү төҙәлә, әлеге ваҡытта вуз Германия менән һөйләшеүҙәр алып бара.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө сығарылыш уҡыусыһының сит ҡалаларҙа урынлашҡан абруйлы вуздарға китеп белем алыу мөмкинлеге бар. Шуға ла һәләтле йәштәрҙе йәлеп итерлек булырға тейеш республиканың төп вуздары. Башҡорт дәүләт университеты етәкселеге һәм уҡытыусылары ошо хәҡиҡәтте гел иҫендә тотоп эш итергә һәм студенттар өсөн бар шарттарҙы тыуҙырырға тырыша.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

# МӘКТӘП ЭСКӘМЙӘҺЕНӘН...

## иҡтисад серенә төшөн

**Баш ҡалала урынлашҡан алдынғы уҡыу йорттарының береһе - Республика иҡтисад лицей-интернаты иҡтисад, эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре һәм математика-физика дисциплиналарын тәрәнәйтеп өйрәнеүсе инновацион белем усағы һанала. Уның төп маҡсаттарының береһе -ошо йүнәлештәр буйынса вуздар өсөн буласаҡ студенттар әҙерләү.**

Республика иҡтисад лицей-интернатының тағы ла бер үҙенсәлеге булып егеттәр һәм ҡыҙҙарҙы айырым уҡытыу тора. Уҡыу йортонда белем биреү-тәрбиә эше бөгөнгө заманға енел яраҡлаша алыусы шәхестәр тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Уҡыусылар тәжрибәле уҡытыусылар етәкселегендә фән менән шөғөлләнә, сит илдәр менән бәйләнеш булдыра. 2008 йылда лицей Мәғарифҡа ярҙам фонды сиктәрендә видеоконференция бәйләнеше ҡоролмаһы менән йыһазландырыла һәм хәҙер уҡыусыларҙың донъяның бөтә илдәре менән телеконференциялар уҙғарыу мөмкинлеге бар. Информатика, технология, физика, химия, биология, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, инглиз теле, иҡтисад, математика кабинеттары ла заманса шарттарға тулыһынса яуап бирә. Буш ваҡыттарында уҡыусылар бокс, волейбол, көрәш, шахмат, баскетбол, ушу-саньда, ушу-таолу, бейеү, театр, вокал, ҡурай һ.б. түңәрәктәр ҙә шөғөлләнә.

Әйткәндәй...

Республика иҡтисад лицей-интернаты 2010/2011 уҡыу йылына 7-се иҡтисад (малайҙар һәм ҡыҙҙар), 9-сы иҡтисад (малайҙар һәм ҡыҙҙар) һәм физика-математика (малайҙар) йүнәлешендәге синыфтарға уҡыусылар ҡабул итә. Уҡырға килергә теләк белдереүселәр 21 июнгә тиклем ҡабул итеү комиссияһына түбәндәге документтарҙы тапшырырға тейеш:

паспорт йәки тыуыу тураһында таныҡлыҡтың күсермәһе; баһалар ведомосы; ғариза; портфолио (булһа). Әңгәмәләр 2010 йылдың 24 июнендә 7-се синыфтарға, 25 июндә 9-сы синыфтарға үткәрелә.

Ҡабул итеү комиссияһының адресы: Өфө ҡалаһы, Нежинская урамы, 13.

**Ғаризаларҙы www.reli.ucos.ru сайтында ҡалдырырға мөмкин. Һорауҙар менән (347) 242-98-39 телефоны аша мөрәжәғәт итергә. E-mail: reli@list.ru**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ошо арала Өфөнән Сибай ҡалаһына авиарейс асыла. Пассажирҙарҙы Utair авиакомпанияһы хеҙмәтләндерәсәк. Сибай аэропортында ике саҡрым оҙонлоҡтағы осоу-ултырыу һыҙатын ремонтлау тамамланған да инде. Ун туғыҙ кеше һыйҙырышлы L-410 самолеттары яҡын арағa - 1000 саҡрымға ғына иҫәпләнгән. Билет хаҡы 1500 һум тора. Шулай уҡ тиҙҙән Нефтекамаға ла рейс асыласаҡ.

✓Рәсәй көнө, Салауат көндәре, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм баш ҡала көнө сиктәрендә "Кашҡаҙан" ял һәм мәҙәниәт паркында 11 июндән 14 июнгә тиклем "Өфө - спорт ҡалаһы" тигән физкультура-спорт байрамы үтә. Унда "Спорт ғаиләһе" фестивале һәм спорт төрҙәре буйынса ярыштар ҡаралған. Физкультура-спорт байрамында меңдән ашыу кешенең ҡатнашыуы көтөлә.

✓Республика йылына һәм III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына арнап Өфө ҡалаһының йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары "Башҡорт милли аш-һыуы - республика байлығы" тип аталған фестиваль үткәрә. Сарала Өфө ҡалаһынан 80 предприятие ҡатнаша. Фестивалде БР Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты ойоштора.

✓"Сипайлово-3" микрорайонында дөйөм белем биреү мәктәбе төҙөләшө аҙағына яҡынлаша. Өфөнөң был районында әлеге ваҡытта 120 меңдән ашыу кеше йәшәй, шуға ла унда балалар баҡсалары һәм мәктәптәргә һорау ҙур. 825 урынға иҫәпләнгән яңы мәктәптә иркен кластар, китапхана, спорт һәм акттар залы, медицина кабинеттары заман талаптарына тулыһынса яуап бирә.

✓Өфө моторҙар эшләү берекмәһе алтынсы тапҡыр "Иң яҡшы Рәсәй экспортеры" тигән исемгә лайыҡ булды. ӨМЭБ Рәсәйҙә авиация двигателдәре етештереүсе иң эре компанияларҙың береһе һанала. 2009 йылда ул 20014 миллион һум табыш алыуға өлгәшкән.

✓Быйыл Өфөлә ғинуар-май айҙарында 146 мең квадрат метр торлаҡ ҡулланыуға тапшырылған. Был һан былтырғы йылдың ошо ваҡыты менән сағыштырғанда 9,9 процентҡа юғарыраҡ. Йыл аҙағына тиклем баш ҡалала 600-620 мең квадрат метр торлаҡ төҙөү ҡаралған. 90 торлаҡ йортҡа тулыһынса ремонт эшләү ҙә планлаштырыла, быйыл өсөн 484 млн һум аҡса бүленәсәк.

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# УРАМ АТАМАЛАРЫ ЛА...

## шәхестәребеҙ исемендә яңғырай



**Йәйҙең тәүге айы халҡыбыҙ тормошондағы күренекле ваҡиғаларға, күркәм даталарға бай. 1-2 июндә Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үтеүенә ун биш йыл тулды. 15-16 июндә Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы булып үтеүенә һигеҙ йыл туласаҡ. Ә 10-11 июндә бына шаулап-гөрләп Өсөнсө Ҡоролтай үтеп бара. Шулай итеп, 1995 йылдан бирле июнь ҡоролтайҙар айына әүерелде. Үҙенсәлекле бер күренеш был. Халҡыбыҙҙың оло йыйынының инде нисәнсе тапҡыр тап йәй башында, тәбиғәттең гөрләп сәскә атып, йәшелләнеп, йәмләнгән бер мәлендә үткәрелеүе үҙе үк тәрән мәғәнәгә эйә лә баһа. Милләтебеҙҙең үҫергә, үҫешергә, сәскә атырға әҙер булыуына ишара бит был.**

Ҡоролтайҙарыбыҙҙың Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү көндәре менән тап килеүе лә бер ҙә осраҡлы түгел. Рәсәй менән борон-борондан килешеүҙәр нигеҙендә эш иткән, Рәсәйҙең федератив ҡоролошона нигеҙ һалған милләт булараҡ, башҡорт үҙенең оло ҡорон яңы Рәсәй дәүләтселеге иғлан ителеү көндәрендә үткәрә икән, тимәк, шулай кәрәк. Рәсәйҙең иң эре милләттәренең береһе ҡорға йыйылһа, унда тикшерелгән мәсьәләләр, ҡабул ителгән ҡарарҙар илебеҙҙең тормошона, киләсәгенә, социаль-иҡтисади, милли-мәҙәни үҫешенә, халыҡтар араһындағы мөнәсәбәттәргә йоғонто яһамай ҡалмаясағы аңлашыла бит.

Беренсе ҡоролтайҙан һуң арыуыҡ ваҡыт үткән һымаҡ. Ун биш йыл элек был донъяға килгән сабыйҙар бөгөн оло тормошҡа аяҡ баҫа. Асылда иһә, беҙгә, замандаштарға йәшәргә, эшләргә, ижад итергә насип булған үҙгәрештәр осоронда һәр бер йыл тотош дәүергә торошло. Ун биш йыл эсендә әллә күпме ваҡиғалар булды, илебеҙ көслө тетрәнеүҙәр кисерҙе, йәмғиәтебеҙ ҡырҡҡа төрләнде, телебеҙгә яңы һүҙҙәр, тормошобоҙға яңы шәхестәр, йәшәйешебеҙгә яңы мәғәнә инде. Быға тиклем ҡаҡшамаҫ абруйға эйә тип һаналған кешеләр һәм төшөнсәләр ҡайҙалыр тарих төпкөлөнә батты.

Беренсе Ҡоролтайҙың ниндәй шарттарҙа үтеүен иҫебеҙгә төшөрәйек. Торғонлоҡҡа батҡан, һөрһөгән дәүләт өҫтөндә яңы елдәр иҫте. "Азатлыҡ", "Ирек", "Үҙаллылыҡ" һүҙҙәре яңғыраны. Халыҡтар иркенләп һулыш алыу мөмкинлегенә эйә булды. Ниһайәт, Рәсәйҙә үҙ ерҙәрендә ғүмер иткән милләттәр тиҫтәләгән йылдар буйына тупланып килгән проблемаларын үҙҙәре хәл итә алыу мөмкинлегенә эйә булды. Ошо шарттарҙа милли ойошмаларыбыҙҙың тәүәккәллеге, тырышлығы, рәсми органдарыбыҙҙың әүҙем булышлығы, энергияһы менән бар донъянан башҡорттар оло Ҡорға - халҡыбыҙҙың әллә күпме йыл, хатта быуат ашҡынып, ярһып, өмөтләнеп көткән йыйынына йыйылды.

Хәтерләйһегеҙме, ул ҡоролтайҙы бөтә халыҡ көтөп алды. Рәсәй Федерацияһының төбәктәрендә үҙҙәренең тарихи ерҙәрендә ғүмер иткән Силәбе һәм Ырымбур, Һамар һәм Һарытау, Пермь һәм Свердловск, Минзәлә һәм Ҡурған башҡорттары, сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ Башҡортостанға ынтылды. Баш йорттағы милләттәштәр менән аралашыуға һыуһап, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ" тигән раҫланманы дөрөҫләргә тип килде улар. Ысынлап та, беҙҙе үҙ еребеҙҙә көтәләр, беҙ был илгә, Башҡортостаныбыҙға кәрәкбеҙ, тип өмөтләнеп килде улар. Шуға ла сығыштар ярһыу, фекерҙәр көслө, теләктәр өмөтлө булды. Шуларҙың береһе "Баш ҡалабыҙ Өфө - милләтебеҙҙең баш йортона әүерелергә тейеш" тигәне лә күп кенә сығыштарҙа яңғыраны, рәсми трибунанан да, делегаттарҙың фекер алышыуҙарында ла ишетелде.

1949 йылда уҡ Рәғиҙә Янбулатова һүҙҙәренә Хөсәйен Әхмәтов ижад иткән "Гүзәл Өфөм - баш ҡалам" тигән йырҙың һүҙҙәрен бөтәһе лә хәтерләйҙер. "Тау башында балҡый бер ҡала" тип башлана ул. Халҡыбыҙҙың яратҡан йырҙарының береһе. Был йыр яҙылыуға инде 60 йылдан ашыу ваҡыт үткән. Ағиҙелдә күпме һыу аҡҡан. Йыр һаман иҫкермәй. Киреһенсә, бөгөн ул яңы һулыш ҡына ала. Йырға, милләттәштәрҙең баяғы теләгенә эйәреп, ысынлап та, Өфөбөҙ башҡорттоң баш йортона әйләнә бара. Уның тураһында инде башҡортса яңы йырҙар ижад ителә.

Хәтеремдә, Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан ғына башҡорт йәштәре гәзитендә баш ҡалабыҙҙың үҙенсәлекле бер карта-схемаһы баҫылып сыҡҡайны. Йәш журналистар, гүйә, киләсәкте күҙаллап, Өфөнөң күп кенә урамдарына яңы атамалар, халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәренең исемен биргәйне. Бөгөн тәүге ҡоролтайға ун биш йыл тулғанда уларҙың күп кенә хыялдарының тормошҡа ашыуын күрергә була. Баш ҡалабыҙҙы үтәнән-үтә ярып үткән киң, матур Салауат Юлаев проспекты Өфөнө биҙәп кенә ҡалмай, ҡалабыҙҙың күп кенә транспорт, экология проблемаларын хәл итеүгә булышлыҡ итә. Үҙәк урамдарыбыҙҙың береһе Әхмәтзәки Вәлиди, икенсеһе Мостай Карим исемен алды. Өр-яңы йорттар тупланған "Көньяҡ" биҫтәһендә Зәйнәп Биишева, Заһир Исмәғилев исемдәрен йөрөткән урамдар барлыҡҡа килде. Дим биҫтәһендә күренекле генералыбыҙ Таһир Кусимов урамы йылдам төҙөлә, уның бюсы Еңеү паркында үҙенең лайыҡлы урынын алды. Баш ҡалабыҙҙың һәр бер районында бөгөн башҡорт гимназияһы йәки лицейы, башҡорт балалар баҡсаһы эшләп килә. Уларҙың һәр береһе тиерлек күренекле шәхестәребеҙҙең исемен йөрөтә. Әйтәйек, Совет районындағы 20-се башҡорт гимназияһы бөгөн Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһы тип атала. Баш ҡалала башҡорт милли мәғарифын үҫтереүгә ифрат күп көс һалған заман мәғрифәтсеһе Мөхәммәт Иҫҡужиндың исеме Октябрь районындағы 136-сы башҡорт лицейына бирелде. Киров районындағы 158-се гимназия Мостай Кәрим исемен йөрөтә. Өфөлә бөгөн йәмғеһе һигеҙ башҡорт мәктәбе һәм туғыҙ балалар баҡсаһы эшләй. Башҡорт мәктәптәренә теге йәки был сәбәп буйынса йөрөй алмаған башҡорт балалары аҙнаһына 4-5 сәғәтлек программа буйынса башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән белем алыу мөмкинлегенә эйә. Уҡытыусыларыбыҙ ҙа һынатмай. Өфөнөң 141-се урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлназ Мөхәмәтйәнова үҙенең педагогик оҫталығын Рәсәй Федерацияһы кимәлендә раҫланы.

Баш ҡалабыҙҙың башҡорт матбуғатын үҫтереү өлкәһендә лә уңыштарыбыҙ ҡыуанып һөйләрлек. Бар республикаға таралған һәм үҙенсәлекле теле, стиле, авторҙары менән үҙ уҡыусыһын тапҡан "Киске Өфө" гәзитенән тыш, Өфөнөң айырым райондарында ла башҡорт телендә баҫмалар сыға башланы. Уларға хәҙер баш ҡала халҡының ылығыуы, уҡыуы, алдыра башлауы ғына кәрәк.

Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге ҡаҙаныштарыбыҙҙы бер мәҡәлә сиктәрендә генә әйтеп бөтөрөүе лә мөмкин түгел. Әммә республика сиктәрендә генә түгел, донъя кимәлендә дан ҡаҙанған "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле тураһында әйтмәй ҡалдырып булмаҫ. Ул бөгөн башҡорт милли сәнғәтен - йырын һәм бейеүен пропагандалаған көслө коллектив. Баш ҡаланың данын төрлө илдәрҙә тарата ул.

Әлбиттә, эшләнәһе эштәр күп. Хәл ителмәгән мәсьәләләр бихисап. Уларҙың күбеһен бөгөн дәүләт һәм урындағы үҙидара органдары тормошҡа ашырып сыға ала. Әммә халыҡтың үҙенең милләтте һаҡлап алып ҡалыу, үҫтереү теләге булмаһа, бар тырышлыҡ бушҡа китәсәк, бүленгән аҡса сарыф ителәсәк. Беҙгә тәү сиратта үҙебеҙгә башҡорт булып ҡалыу, балаларҙы, ейәндәрҙе милли рухта тәрбиәләү, уларҙы улар өсөн асылған башҡорт гимназия-лицейҙарында теләп уҡытыу, башҡорт телендәге гәзиттәрҙе алдырып уҡыу, баш ҡалала барған милли-мәҙәни сараларҙа әүҙем ҡатнашыу бурыс булып тора. Милли эшҡыуарлыҡты үҫтереү, тимәк, халҡыбыҙҙың тормош кимәлен күтәреүҙе лә бит халыҡтың теләгенән тыш бойомға ашырып булмай. Шулай булғас, бергә, бер төптән, бер тамырҙан булайыҡ!

**Сынтимер БАЯЗИТОВ,**

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Оҙаҡ йәшәү өсөн



❖ Йүкә сәскәһен, бөтнөктө, һары мәтрүште 1-әр ҡалаҡ алып, ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп төнәтергә. Аҙаҡ иҙеп 1 ҡалаҡ алоэ, 15 грамм бал һәм балғалаҡ осона эләктереп онталған ҡара борос өҫтәгәс, көнө буйына эсеп бөтөргә. Дауалау курсы ике аҙнанан да кәм түгел.

❖ Бер баш һарымһаҡ, бер лимон, бер әфлисунды ит турағыстан үткәргәс, 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға. Көнөнә 1-әр балғалаҡлап 2-3 тапҡыр ашарға. Яҙ һайын курс үткәрергә.

❖ 4-әр баш таҙартылған һарымһаҡты, ҡабығы менән лимонды ит турағыстан үткәреп, өҫтөнә үҫемлек майы ҡойорға. Ҡатнашманы һыуытҡыста һаҡларға. 1 ай буйы көнөнә 2-шәр балғалаҡлап бер тапҡыр эсергә.

❖ Шулай уҡ кунжут, етен орлоҡтарын, кориандрҙы онға әйләндереп болғатҡас, көнөнә бер тапҡыр ярты балғалаҡ ашап торһаң, организмға яҡшы тәьҫир итә.

### Ҡатын-ҡыҙ ҡолағына

❖ Ҡатын-ҡыҙҙарға климакс ваҡытында әнис орлоғо эсеү һәйбәт.

❖ Әнис орлоғо, киптерелгән әфлисун ҡабығы, мелисса үләнен 10-ар грамм алып, бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә һәм эсергә.

❖ 1-әр ҡалаҡ бөтнөк менән һырғанаҡ япраҡтарын 1-әр әфлисун менән мандарин ҡабығын 1 литр ҡайнар һыу менән ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырғас, иртәгеһенә көнө буйы эсеп бөтөрөргә. Курс - 2 аҙна.

❖ 1-әр ҡалаҡ ҡайын бөрөһө, һары мәтрүшкә, аҡ сәскә, шинмәҫгөлгә (бессмертник) ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп төнәткәс, 1 ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға һәм көнө буйы эсеп бөтөргә. Дауалау курсы - 2 аҙна.

❖ 1-әр ҡалаҡ гөлйемеш, энәлек һәм май айында йыйылған ҡайын япрағын ике стакан ҡайнар һыу менән бешекләп 4 сәғәт төнәткәс, өскә бүлеп эсергә. Дауалауҙы 10 көн дауам итергә.

❖ Кишерҙе ҡырғыстан үткәргәс, үҫемлек майы менән болғатып ашарға.

**Алһыу ҒӘЗИЗОВА.**




## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ашау һәм эсеү ҡағиҙәләре

● Ашағанда ҡаҡрыҡ, маңҡа, төкөрөк һәм күңел болғатыуға, ҡоҫҡо килеүгә сәбәп буласаҡ ерәнес нәмәләр тураһында һис һөйләмәгеҙ.

● Ҡул һөртөү өсөн махсус паҡ һәм яҡшы таҫтамал әҙерләгеҙ. Күлдәк һәм башҡа кейемдәрҙән алынған сепрәк киҫәктәрен, зинһар, ҡунаҡтар һәм аш алдына сығармағыҙ.

● Ҡаҙ, өйрәк, күркә һәм күмәс кеүек нәмәләрҙең барыһын ҡунаҡтар алдына турап, ваҡлап сығарығыҙ. Ҡунаҡтар алдында уларҙы турап ҡиммәтле ғүмерҙәрен исраф иттермәгеҙ, мәжлестә булғандарҙы биҙерлек итеп көттөрмәгеҙ.

● Ҡулығыҙҙа бетсә, ҡысыу һәм йәрәхәт эҙҙәре булһа, ит турамағыҙ һәм мәжлес менән идара итмәгеҙ (табынсы булмағыҙ).

● Ашағандан һуң ҡулдарығыҙҙы һәм ауыҙҙарығыҙҙы һыу һәм һабын менән яҡшы йыуығыҙ һәм таҫтамал менән һөртөгөҙ. Теш араларында нәмә ҡалдырмағыҙ. Йыуыныу өсөн башҡалар менән төртөшмәгеҙ. Уларҙың бушағандарын көтөп тороғоҙ.

● Бешмәгән емештәрҙе, бигерәк тә эҫе көндәрҙә, майлы аштарҙы күп ашамағыҙ. Бер ваҡытта ла өҫтө-өҫтөнә һәм ваҡытһыҙ ашарға ғәҙәтләнмәгеҙ. Ауыҙға алған нәмәләрҙе тулыһынса сәйнәгеҙ.

● Ныҡлап асыҡмайынса, шулай уҡ ныҡ шатлыҡлы һәм хәсрәтле ваҡыттарҙа ашамағыҙ. Ашағанда өҫтөгөҙҙә тар һәм ҡыҫтау кейемдәр булмаһын. Аслыҡ ауырыуы бөткәс, туҡталығыҙ. Эсегеҙ тулғанын, аппетитығыҙ бөткәнен көтмәгеҙ. Был сәләмәтлек өсөн ҙур сәбәп икәнен һис бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

● Ашағанда бик ашыҡмағыҙ һәм бик әкрен дә булмағыҙ. Ашағандан һуң бер аҙ ваҡыт үткәнгә тиклем һыу эсмәгеҙ.

● Эскегеҙ килгәндә балсыҡлы, ҡомло, күләүек һәм күл, боҙло һыуҙар эсмәгеҙ, саф һыу эсегеҙ.

### Сәй эсеү ҡағиҙәләре

● Ҡунаҡ алдына сығарыласаҡ сәй әсбаптарың керһеҙ, туҙанһыҙ, ғәйәт саф һәм пак булыуына иғтибар итегеҙ. Самауырығыҙҙы көлдән һәм күмерҙән таҙартығыҙ.

● Күгәргән һәм тутыҡҡан бысаҡтар менән лимон киҫмәгеҙ. Лимонды ҡалын һәм эре турамағыҙ.Ҡунаҡҡа барғанда хужалар ихлас итеп әйтмәһә, сәй янында булған әфлисүн, алма һәм башҡа емештәрҙе кеҫәгеҙгә һалып китмәгеҙ.

● Эскәндә сәйҙең бөртөктәрен сынаяҡ табағына һалмайынса, кәсә һәм стакан төбөндә һөҙөп ҡалдырығыҙ. Сәйегеҙҙе тауыш сығармай эсегеҙ. Ололар алдында уларҙан алда эсергә башламағыҙ. Сынаяҡ аҫтын ике ҡулығыҙ менән тотмағыҙ. Зарур булмаһа, һул ҡулығыҙ менән эсмәгеҙ.

● Сәй бөртөктәрен сәйгүнгә һалмаҫтан элек ҡайнаған һыу менән сәйгүнде сайҡап түгегеҙ. Сәй бөртөктәрен һалғандан һуң, ҡайнап торған һыуҙы эҫе сәйгүнгә һалығыҙ. Сәй эскәндә булған шарттарҙың иң олуғтарын ошо ике нәмә булғаны өсөн быларҙы башҡарыу өсөн һис ялҡауланмағыҙ.

**(Дауамы бар).**

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

**III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы трибунаһына халҡыбыҙҙың киләсәге менән бәйле бик мөһим мәсьәләләр сығарылды, уларҙы хәл итеү буйынса асыҡтан-асыҡ фекер алышыу булып, яҡын киләсәктә иң әүәл башҡарырға тейешле эш-ғәмәлдәребеҙ барланасағына шик юҡ. Милли башҡорт мәғарифын үҫтереү - бар халҡыбыҙға берҙәй ҡағылған, һәр ҡайһыбыҙ тарафынан иң изге бурыс итеп ҡабул ителгән ғәмәлдәрҙең береһе. Ошо өлкәлә ҡаҙаныштарыбыҙ етерлек, әммә хәүеф тыуҙырған проблемалар ҙа күбәйеп бара. Мәғариф системаһын оптималләштереү тип аталған ҡулайлаштырыу сәйәсәте милли мәктәптәребеҙ, бигерәк тә бәләкәй башҡорт ауылдарындағылары өсөн быуар йыланға тиң. Федераль үҙәк милли-төбәк компоненты предметтарын юҡ итеү маҡсатынын бер нисек тә тайпылмаҫҡа тырыша. Милли мәктәп бөтөрөлһә, төрлө милләт кешеләрен "рәсәйле граждандар милләте" сафтарына күсереү өсөн тап-таҡыр юл асылыуын яҡшы аңлай үҙәктең ҡайһы бер яһил сәйәсмәндәре. Уларҙың республикаларҙағы милли дәүләт телдәрен танырға теләмәүендә лә әлеге план-маҡсаттары үҙенән-үҙе беленеп тора.**

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ,

## уға дәүләт ҡурсалауы фарыз



Хәҙерге осорҙа башҡорт телен республикабыҙҙың дәүләт теле булараҡ үҫтереү, уны ҡулланыу даирәһен киңәйтеү өсөн ныҡлы юридик нигеҙ бар.

1999 йылда "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы республика законын ҡабул итеү башҡорт теленең артабанғы үҫеше өсөн хәл иткес роль уйнаны. Ошо законды ғәмәлгә ашырыу буйынса Дәүләт про-граммаһын ҡабул итеү, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы республика комиссияһының һәм урындарҙағы комиссияларҙың башҡорт телен һәм башҡа халыҡтарҙың тел өлкәһенә ҡараған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында алып барған эшмәкәрлеге лә бик әһәмиәтле.

Тел мәсьәләләренең дөрөҫ ҡуйылыуы һәм сиселеше иң әүәл мәғариф системаһының ошо өлкәләге даими эше һәм уңыштары менән бәйле. Әлбиттә, башҡорт теленең туған тел булараҡ уҡытылыуын, башҡорт мәктәптәрен тергеҙеү эшмәкәрлеген иң мөһим ҡаҙаныштар рәтенә ҡуйырға була. Әммә башҡорт теленең абруйын күтәреү өсөн уға башҡа халыҡтарҙың ыңғай мөнәсәбәтен булдырыуҙы ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Был иң тәүҙә мәктәптәрҙә һәм махсус урта белем биреү учреждениеларында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыу һәм уны һөҙөмтәле башҡара алыу менән бермә-бер бәйле.

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ элегерәк тә был мәсьәләне бик оҙаҡ ваҡыт дауамында икенсе планға күсерә килеп, ошо өлкәләге эштәргә һуңлабыраҡ тотондоҡ. Ошо йәһәттән башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу хаҡындағы норматив-хоҡуҡи положениеның "Мәғариф тураһында"ғы БР Законына тик 2005 йылда ғына индерелеүен дә иҫкә алмайынса булмай. Ошо юридик норманың белем биреү йөкмәткеһенең элекке дәүләт стандарттарына ярашлы билдәләнеүе Рәсәйҙә ошо өлкәлә яңы хоҡуҡи положение ҡабул ителеүе һөҙөмтәһендә үҙенең юридик нигеҙен юғалтты. Дәүләт белем биреү стандарттарының милли-төбәк компонентын юҡҡа сығарыуға нисек кенә ҡаршы булһаҡ та, Федераль властар был мәсьәләне беҙ теләгәнсә хәл итергә ашыҡмай, һәм бының сәйәси сәбәптәре бөтәбеҙгә лә билдәле. Бөгөн беҙҙең "Мәғариф тураһында"ғы закондың әле һүҙ барған положениеһы Рәсәй ҡануниәтенә тура килмәй, һәм РФ Генераль Прокуратураһы ошо хаҡта мотлаҡ протест белдерәсәк. Тимәк, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыуҙың яңы, законлы юлдарын табыуҙы хәҙерҙән үк хәстәрләргә кәрәк.

Әйтергә кәрәк, белем биреү өлкәһендә дәүләт стандарттарының яңыртылған төшөнсәһен индереү үҙенән-үҙе башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы алыу хоҡуғына ни тиклем зыянлы булыуы хаҡында әйтеп кенә түгел, ҡысҡырып сығырға кәрәк бит. Рәсәй төбәктәрендә тап ошо сәбәптән меңдәрсә мәктәптең ябылып, ауылдарҙың юҡҡа сығыуын күрмәмеш тә белмәмеш булыусылар чиновниктар араһында етерлек.

Ә бына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законлылығын иҫбат итеү генә түгел, уны артабан камиллаштырыу өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Һәм иң элек беҙгә ошондай мөмкинлекте Рәсәй Федерацияһының Конституция Суды 2004 йылдың 16 ноябрендә Татарстан Республикаһында татар теленең дәүләт теле сифатында рус теле менән бер күләмдә уҡытылыуы буйынса ҡабул иткән ҡарары бирә. Ошо ҡарарға ярашлы, татар телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу үҙенең конституцион-хоҡуҡи асылы буйынса Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килмәй, һәм уҡыусыларҙың төп дөйөм белем һәм артабан юғарыраҡ кимәлдәге белем алыу хоҡуғына ҡамасауламай. Рәсәй Конституция Суды ҡабул иткән ошо ҡарар Рәсәйҙең бөтә субъекттары өсөн берҙәй ҡулланыла, йәғни, милли республикаларҙа үҙ дәүләт телдәрен уҡытыу өсөн әле һүҙ барған юридик документ иң юғары кимәлдәге һәм туранан-тура мотлаҡ үтәлә торған күрһәтмә ролен үтәй. Ошо ҡарарға ярашлы башҡарылған эшмәкәрлек башҡа бер органдарҙың һәм вазифалы кешеләрҙең раҫлауын талап итмәй.

Тимәк, РФ Генераль Прокуратураһының да, Рособрнадзорҙың вазифалы функционерҙарының да Башҡортостанда башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законға ярашлы булыу-булмауын тикшереп йөрөүе үҙе үк иң юғары кимәлдә ҡабул ителгән юридик аңлатманы белмәүен, йәиһә белеп тә, билдәле бер сәйәси маҡсатҡа ярашлы эш башҡарыуын күрһәтә. Бөгөн Рәсәй Мәғариф министрлығынан төшөрөлгән база уҡыу пландарында республикаларҙың дәүләт телдәрен предмет булараҡ уҡытыу бөтөнләйгә инҡар ителә. Беҙ был хәлде лә мәғариф чиновниктары тарафынан Рәсәй Конституция Судының әлеге ҡарарын, "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы РФ Законы положениеларын һанға һуҡмау, тип аңларға тейешбеҙ. Рәсәй Мәғариф министрлығынан милли республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыуҙы милли төбәктәр өсөн төҙөлгән база уҡыу планына индереүҙе талап итеү өсөн юридик нигеҙ бар, һәм беҙ быға мотлаҡ өлгәшергә тейешбеҙ.

*Милләт мәнфәғәттәренә зыян итер күренештәргә ҡаршы көрәшеүҙә ҡыйыулыҡ күрһәтергә кәрәк. Бына, мәҫәлән, халҡыбыҙ бөгөн белем биреү стандарттарының милли-төбәк компоненты бөтөрөлөү менән риза түгел, һәм ошо хаҡтағы халыҡ фекере 260 мең шәхси имза менән нығытылған. Әгәр Федераль үҙәк ошо мәсьәләне хәл итергә теләмәй икән, беҙ уны яңынан күтәреп сығырға бурыслыбыҙ. Әгәр үҙ һүҙебеҙҙе өҫкә сығара алмаһаҡ, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен үҫтереү мөмкинлеге менән бергә ватансыл йәштәр тәрбиәләүҙә лә ҙур юғалтыуҙарға дусар буласаҡбыҙ.*

*"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.*

Юҡҡа сығара, тип фекер йөрөтөүселәр бар, һәм улар мөмкин булған барлыҡ инстанцияларға ялыу яҙыуҙы ла юлға һалды. Һөҙөмтәлә РФ Генераль Прокуратураһының талабы буйынса Рособрнадзор эксперттары ошо мәсьәлә буйынса тикшереүҙәр ҙә уҙғара башланы. Уларҙың беҙҙең мәғариф органдарына дәғүәһе бына нимәнән ғибәрәт: башҡорт телен бар мәктәптәрҙә лә аҙнаһына 2 сәғәтлек уҡыу планы буйынса уҡытыу уҡыусының башҡа предметтар буйынса белем алыу хоҡуғына зыян килтерә, имеш! Был хаҡта һүҙ сыҡҡас, мәктәптәрҙе йән башына финанслауҙың миллиондарса Рәсәй уҡыусыларының белем

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Усольск заводынан юлыбыҙ Ағиҙел йылғаһының таулы яры буйлап дауам итте. Ул саҡта йылғаларҙа шаулап-гөрләп аҡҡан яҙғы һыуҙар юлыбыҙҙы ауырлаштырҙы; ул көндө алға табан 16 саҡырымда ятҡан башҡорт ауылы Ҡотлоғужанан да йырағыраҡ китә алманыҡ. Ошо 16 саҡырым араулыҡта Ағиҙелгә ҡойоусы Инйылға тигән ҙур булмаған йылғасыҡ исеме менән аталған бәләкәй генә башҡорт ауылы бар, беҙгә ошо йылға кисеүе аша сығыу унай булды.

Беҙ Ҡотлоғужа ауылына килгәндә, башҡорттар ығы-зығылы эштәр менән мәшғүл ине; ошоноң сәбәбе тураһында һорашҡас, улар иртәгә буласаҡ Һабантуйға йәғни, Һабан байрамына әҙерләнеүҙәрен белдерҙе. Башҡорттар әле лә бик әүҙем һәм шәп ер эшкәртеүсе булмаһа ла, урыҫ һәм яһаҡ түләүсе татар ауылдары менән күрше йәшәгәнлектән, игенселеккә илтифат итә башланы; һәр кем иң кәмендә үҙенә етерлек кимәлдә булһа ла ашлыҡ сәсергә тырыша. Улар күбеһенсә тары һәм һоло сәсә, ә ужым игенен үҙҙәренә кәрәк тип тапмай. Тарма сәсеүгә лә үтә иғтибарлы улар: көнкүреш тәжрибәһе уларға киндер туҡыманың ата-бабалары ҡулланған кесерткән туҡыманан күпкә яҡшыраҡ икәнен төшөндөргән. Үҙ губернаһының етеш тормошо хаҡында ҡайғыртҡан Ырымбур идаралары төрлөсә хуплау юлдарын табып, башҡорттарҙың ер эшкәртеүгә йылдан-йыл хәстәрлерәк тотоноуына булышлыҡ итә һәм, бәлки, ваҡытлар үтеү менән улар үҙҙәренең игенселеге менән мишәрҙәр һәм татарҙар кеүек үк файҙалы эш башҡарасаҡ; тик бының өсөн уларҙы аҡрынлап күсмә тормош алып барыуҙан арындырырға кәрәк буласаҡ. Табын ҡаласығы янында башҡорттар урыҫтар менән шулай уҡ күршеләш булһалар ҙа, башҡаларға ҡарағанда үҙ ерҙәштәренең йолаларын тиҙерәк ҡабул итә, һәм Һабан байрамы ошоға миҫал булып тора.

Һабан байрамы ер һөрөү ҡоралы булған һабан менән бәйле шулай атала һәм һабанға төшөү алдынан билдәләнә. Был тантанала донъяуи һәм рухи йолалар ҡатнаш булып, түбәндә бәйән ителгәнсә башҡарыла.

Кистән бөтөн ауылдан йәш егеттәр йыйылып, иң шәп аттарҙа ауылдың бер осонан икенсеһенә тиклем үтеп, кире килгәндә һәр өй ҡаршыһында туҡтала, ошо өй хужаһы ниндәйҙер бер бүләк алып сыҡҡансы иҫ китмәле тауыш һәм шау-шыу сығара. Башлыса, уларға тауыҡ йомортҡалары бирәләр. Һәр йорттан ошо түләүҙе йыйып бөткәс, йәштәр үҙ йорттарына ҡайтып китә. Иртә менән ҡояш сыҡҡансы ошо йәштәр төркөмө яланға йүнәлә һәм, байтаҡ ҡына ара тәшкил иткән ерҙе билдәләп, кемуҙарҙан сабышып сығып китә. Ауылға кергән ерҙә уларҙы ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған тамашасылар көтә; тамашасыларҙан бер ни тиклем алыҫлыҡта ҡулына мөйөштәре төрлө төҫтәге ебәк еп менән сигелгән аҡ яулыҡ бәйләнгән ҡолға тотҡан егет йәиһә ҡыҙ тора: үҙ атында бөтәнөһөн дә уҙып, ошо яулыҡты ҡолғанан эләктереп алыусыға ошо яулыҡ бүләк итеп ҡалдырыла. Яулыҡтың әллә ни баһаһы булмаһа ла, ошо уҙышта еңеү бик ололана, ә тамашасылар, ҡүмәкләшеп ҡыҫҡырып, еңеүсегә күп маҡтау һүҙҙәре яуҙыра. Әгәр билдәләнгән урынға бер юлы ике кеше бергә килеп етеп, яулыҡты тотһа, ошо бүләкте алыр өсөн бер-береһен көрәшеп еңергә тейеш. Уларҙың көрәше уға шәп булыуы менән билдәле: улар, урыҫ көрәшселәре кеүек, бер-береһенең яғаһынан алмай, ә билбауҙарынан тота һәм көрәштә ҡулланылған ҡәҙимге алымдар ҡуллана. Яулыҡ ҡиммәтле булмаһа ла, осһоҙло бүләкте лә башҡа кешегә үҙ теләге менән ҡалдырыусы һирәк була: уларҙың ҡанунына ярашлы, Һабантуй батырына бирелә торған бүләк ауылдың иң йәш килене тарафынан яһалған була. Батырҙар ярышынан һуң ауылдың бар кешеһе мәсеткә намаҙға йыйыла һәм Аллаһтан мул уңыш һорай. Ошонан һуң ауылда дөйөм ҡунаҡ булышыу башлана; ә йәштәр көрәш, йомортҡа менән йүгереү, бәүелсәктә атыныу, әйлән-бәйлән кеүек уйындар ҡора; байрам тамамланғас, ер һөрөүгә тотоналар.

Бер ни тиклем ваҡыт Һабан тантанаһын тамаша ҡылғас, юлыбыҙҙы дауам иттек, ваҡ ағаслыҡ һәм һырттар буйлап алты саҡырым араны бик ҙур ауырлыҡтар менән үтеп, Йәләйәскән исемле яһаҡ түләүсе татар ауылына килеп еттек. Әле аталған ауылға тиклем юлыбыҙ нисек ауыр булһа, Еғән исемле тиҙ ағымлы һәм ул саҡта уға тәрән булған йылғаны кисеп сығыу ҙа шулай уҡ еңелдән булманы. Бында йәшәүселәр яҡын-тирәләге ауылдар менән бәйләнеш тотһа ла, шул тиклем моңһоҙҙар, күпер түгел, йылға аша сығыу өсөн һал да яһамай: юлға сығырға тура килгәндә менеп йөрөгән аттары менән йылға аша йөҙөп сығалар. Миненсә, ҡүмәкләшеп һал яһау урынына татар кешеһе яҙ көнө үҙенең ике атының да батып үлеүе менән тиҙерәк ризалашыр. Йылға аша сығыу өсөн һал ҡорорға мәжбүр ителгәндәрендә ошо бошмаҡ заттарҙы күҙәтеп тороу йән көйөүҙән бигерәк көлкөлө булып тойолдо: уларҙың ҡайһыһы ла нисек тә булһа һал төҙөүҙә ярҙамлашыуҙан ҡасып-боҫоп ҡалырға тырыша ине; һуңынан, һис шикһеҙ, ошо һал менән уларҙың барыһы ла ҡулланасаҡ.

Йылғаны кискәс, кискә табан Йәләйәскәндән ун һигеҙ саҡырым алыҫлыҡта булған башҡорт ауылы Ишәйгә барып еттек, унда йәшәүсе халыҡ Ағиҙелгә ҡойоусы Һәләүек һыуын эсә. Ошо ауыл эргәһендә Ырымбур топографияһына Аҡтау исеме менән индерелгән мөғжизәле тау бар. Әммә ауыл кешеләре уны Йөрәк Таш (гора Сердце) тип йөрөтә: ул тигеҙ ерҙә урынлашҡан, йоморо һәм үр яғы ослораҡ булғанға шулай атағандар. Беҙҙе ошо тауға барғанда Ишәй ауылынан оҙатып йөрөүселәр булһа ла, уның хаҡында бәйән ителгән бер генә мөғжизәне лә күрмәнек, ауыл кешеләре лә ошо хаҡта әллә ниндәй мәғлүмәт бирә алманы. Оло йәштәге башҡорт ҡарты һөйләүенсә, ул бында саф һыулы шишмә булыуын хәтерләй, әммә ул күп йылдар үтеүгә юҡ булған. Был тауҙың бейеклеге күҙ үлсәме менән етмеш сажин тирәһе; әммә унда менеүе ҡыйын түгел, һәм яҙ көндәрендә башҡорт малдары шунда йөрөй. Ағиҙел йылғаһы ягынан тау ҡаялы һәм уның урыны-урыны менән ниндәйҙер ҙур ғына ҡоролманы хәтерләткән, аҫылынып сығып торған таштары бар. Тау аҫтында Ағиҙел йылғаһынан бәләкәй генә боғаҙ менән айырымланған киң һәм тәрән күл бар. Был күл Яманкүл (Злое озеро) тип атала. Беҙ ошо күлдән әле иҫкә алынған ят һәм ғәжәп нәмәләрҙе эҙләргә уйлағайныҡ, тик юҡҡа ғына булып сыҡты: был күлдең атамаһы уның балыҡтарының ағыулы булыуынан түгел, ә уның төбөндә балыҡ торорға ҡамасаулаған үҫемлектәрҙең күп булыуы менән аңлатыла.

Был күл Йөрәктауҙы икенсе бер Ҡош Тау (гора Стана) тип аталған тауҙан айырып ята: элекке замандарҙа был урын яҙ көндәрен ошонда йәйләргә килгән Кубань ханының станы йәки күсеп килеп ултырған төйәге (кошевье) булып торған (һүҙ Ҡуштау хаҡында бара. - Ред. иҫк.). Ә ошо кубанлыларҙың кемдәр булыуы, ҡайһы замандa йәшәүе тураһында башҡорттар әйтә алмай, сөнки ошо хаҡта бер риүәйәттән генә беләләр. Бейеклеге буйынса был тау тәүгеһенән ҡалышмай, әммә күпкә оҙонораҡ булып, шулай уҡ ҡырағай таштарҙан хасил булған. Ҡош Тауҙан бер саҡырым тирәһеләй алыҫлыҡта ятҡан өсөнсө тау Шишәк Тау тип атала. Бейеклеге буйынса ул тәүгеләренән ҡалышмай. Тау итәгендә Ҡаҙъят исемле киң күл бар.

**(Дауамы. Башы 21-22-се һандарҙа).**

***Беренсе бурыс - тарихыңды өйрәнеү аша милли үҙаңды уятыу. Бар бәләләребеҙ тарихи хәтерҙе юғалтыуҙан, үҙеңдең кемлегеңде белмәүҙән килә. Ҡарағыҙ, бөгөн һәр халыҡ үҙен боронғораҡ итеп күрһәтергә ынтыла. Боронғоһо менән ғорурланған халыҡты берәү ҙә еңә алмай икәнен белә улар. Беҙҙең оҙон ғүмерле булыуыбыҙҙы ғалимдар башҡорттоң Уралда формалашып, уны бер ҡасан ташлап китмәүенә, шулай уҡ тарихи хәтерҙең быуындан-быуынға һаҡланып килеүенә бәйләй. Беҙҙең көс - тамырҙарыбыҙҙа. Ата-бабаларыбыҙҙың киләсәк быуындар ҙа һоҡланырлыҡ тарихи ғәмәлдәре етерлек. Һәр башҡорт тарихтағы Еңеүҙәребеҙ хаҡында белергә, шуға ҡарап рухын яңыртырға, ғорурлығын арттырырға тейеш! Тарих биттәренән ата-бабаларыңдың көнкүрешен, уның кешелек сифаттарын, йолаларын, тәрбиә мәктәбе ҡағиҙәләрен дә өйрән.***

***"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.***

---

ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# МУСА СМАҠОВ

**Муса Ғәтиәтулла улы Смаҡов - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәренең береһе. 1885 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Мәләүез районы) Смаҡ ауылында тыуған. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе.**

1917 йылдың 25-29 августында Өфөлә үткән 2-се Башҡорт ҡоролтайында милли хәрәкәттең башҡарма органы - Башҡорт Үҙәк шураһының яңы составына ағза итеп һайлана. 1917 йылдың 30 августынан Шураның Статистика бүлеген етәкләй, артабан Мәғариф бүлеге мөдире булып эшләй. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһын иғлан иткән тарихи акт - Башҡорт Үҙәк шураһының 2-се һанлы фарманын әҙерләүҙә һәм уны иғлан итеүҙә ҡатнаша.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа Каруанһарай бинаһында үткән 3-сө Бөтөн Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) һайлана.

1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең Арғаяш кантонындағы вәкәләтле вәкиле булып хеҙмәт итә. Бында ул урындағы власть органдарының эшмәкәрлеген яйға һалыуҙа булышлыҡ итә. Башҡортостан төп территорияһынан айырым ятҡан Арғаяш кантонында автономия идараһы эшмәкәрлеген тәьмин итеү еңелдән булмай. Башҡортостан автономияһына Себер хөкүмәте һәр яҡлап ҡаршылыҡ күрһәтә. 1918 йылдың ноябрендә Себер хөкүмәтенең Силәбе районындағы уполномоченныйы полковник Велька Башҡорт хөкүмәте вәкиле Муса Смаҡовты, уның менән бергә Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесе Хафиз Ҡушаевты, кантондың хәрби начальнигы Мансур Мәғәсүмов һәм башҡаларҙы ҡулға алып, Силәбе төрмәһенә бикләп ҡуя. Башҡорт эшмәкәрҙәрен төрмәнән сығарыуҙа булышлыҡ итеүҙе һорап, Әхмәтзәки Вәлиди чехословак корпусы командующийы генерал Сыровойға мөрәжәғәт итә. Ул телеграммаһында былай тип яҙа: "Челябинские русские власти относятся к башкирскому народу, Башкирскому правительству крайне вредно, они упразднили наши башкирские гражданские и войсковые учреждения, арестовали ряд уважаемых башкир и наших представителей. Прошу не отказать в помощи. Убедительно прошу освободить арестованных наших представителей и в особенности члена Башкирского курултая Мусу Смакова...". Ошо телеграмманан һуң ғына, декабрь айында, башҡорт вәкилдәрен төрмәнән сығаралар.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Муса Смаковтың исем-шәрифе документтарҙа осрамай. Башревком эвакуацияға киткән саҡта, боларыш мәлендә хөкүмәттән тороп ҡалғандыр, бәлки. Башревком Саранскиҙан Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡас, 1919 йылдың ноябрендә Муса Смаҡовты Өфө губернаһы властарынан Башҡортостан территорияһы органдары эштәрен ҡабул итеү комиссияһы рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп ҡуялар. Әммә ул был вазифала оҙаҡ эшләмәй.

1920 йылда Муса Смаҡов Башҡортостандың Мәғариф халыҡ комиссариаты Коллегияһы ағзаһы булып тора, йәғни мәғариф комиссариатында эшләй. 30-сы йылдарҙа "Южураллес" тресында инженер булып хеҙмәт итә.

1936 йылдың 1 сентябрендә ҡулға алынып, бер аҙнанан иреккә сығаралар. Муса Смаҡовтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 30-сы йылдарҙың аҙағындағы репрессия елдәре уны ла урап үтмәгәндер, моғайын.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

**✓ Шайтан мине лә көтөп кенә йөрөй. Ҡайһы саҡ: "Тәүҙә ана һыйырыңды һау, намаҙыңды һуңынан уҡырһың", - тип тә әйтә ул. Ә намаҙҙы нәҡ ваҡытында уҡырға кәрәк, саҡ ҡына һуңлаһаң да, сауабы кәмей төшә.**

ғыҙаҡ талаған икән. Ҡыҫҡаһы, кеше, ауыл үҙ фәкирен үҙе ҡарарға тейеш. Шуның өсөн дә элек етем балалар, ҡарттар йорто булмаған бит. "Ауыҙың тулы ҡан булһа ла, төкөрмә", тигән мәҡәл дә тап ошо хаҡта.

## Ҡот - сер...

Беҙҙең ауылдың берәүгә лә оҡшамаған үҙенә башҡа холҡо бар. Беҙҙеке һымаҡ ҡыҙыҡ ауыл юҡтыр ул. Бына Көрәк ауылы халҡы бер идеяға йәбешеп алалар ҙа, ҡыран-ғәләмәт шауҙап йөрөйҙәр. Берәрһенә ҡырҙан ҡунаҡ килһә, өйҙән-өйгә һыйҙап йөрөтәләр. Беҙҙең ауыл илдәге һәм ауыл эсендәге үҙгәрештәргә әллә ни иҫе китмәй, тыныс ҡына йәшәй бирә, шарылдап та бармайҙар. Урамда иҫерек кеше үтеп барһа йә таңдан берәрһе машина менән баҙарға юлланһа, мин уларҙың артынан доғамды уҡып, Алланан ярҙам һорайым. Аллаһы Тәғәлә ярҙамсы, мин - сәбәпсе. Ҡайһы саҡ ҡот ҡойҙорорға ла киләләр. Яңыраҡ ҡот ҡойоуымды төшөрөргә телевидениенан да килделәр. Баш тарттым. Ҡот ҡойоу улай показуха өсөн булырға тейеш түгел. Ҡот ҡойоу - ул Аллаһы Тәғәләнең кешегә биргән сере, уны кешегә күрһәтеү өсөн генә тотошлай тышҡа сығарып һалырға ярамай.

## Тыуманы тыуғас та...

Революцияға тиклем Үтәгәндә һәр өйҙә тиерлек икешәр ҡатын булған. Әсәйем әйтеүенсә, унда хатта өсәр ҡатынлы ир-аттар ҙа йәшәгән. Көндәштәр матур итеп кейенешеп, бергәләп йөрөр булғандар. Ир аталғаны урамда алдан атлай, былары теҙелешеп арттан эйәрә. Көндәштәрҙең һәр ҡайһыһы иргә оҡшарға тырышып, матурыраҡ кейенергә һәм күренергә лә тырышҡан. Хәҙер килеп уйлайым да, күп ҡатын алыу йолаһы шул тиклем дөрөҫ булған бит, тием. Айырылышыу булмаған. Әгәр ҙә ҡатын бала таба алмаһа, йортҡа килгән икенсе ҡатын тапҡан бала менән тәүге ҡатын да йыуанған. Элек ир үлһә, ҡатынын һәм балаларын ҡырға ебәрмәгәндәр, үҙҙәренең араһындағы икенсе берәүгә биргәндәр. Ә хәҙер ирһеҙ ҡатындар, кәләш ала алмаған ир-аттар менән донъя тулы. Хәҙер шайтанский донъя. Кемдер берәү бер ҡатын менән йәшәп ята, үҙенең йәшертен биш ҡатыны бар. Улары менән ижәпһеҙ-ниһеҙ йәшәй, йәшәмәй, гонаһҡа бата. Бының бер яҡшылығы ла юҡ. Ирмен тигән ирҙең бер генә ҡатын менән йәшәүе бөтөнләй дөрөҫ түгел. Был мәсьәләне күтәреп, күптәр алдында яманатлы ла булып бөттөм инде. Ғалимдар иҫәпләүенсә, Ер йөҙөндә ҡатын-ҡыҙҙар ир-атҡа ҡарағанда күпкә артыҡ бит. Был да юҡтан түгел, тимәк, хәләлән килгән ирҙәр (барыһы ла түгел) икешәр-өсөшәр ҡатын алырға хоҡуҡлы тигәндә аңлата түгелме? Ярай, йәшерен осрашып йөрөйҙәр, никахһыҙ-ниһеҙ балалары тыуа, был һәйбәтме? Тыума тип атала бит улар. Халҡыбыҙҙың был хаҡта "Тыуманы тыуғас та быуып үлтер, быуып үлтермәһәң, донъяға бәлә килтерер", - тигән әйтеме бар. Донъябыҙҙан ҡот китеүендә ана шундай юлдар менән тыумаларҙың күпләп тыуыуы ла сәбәпсе булыуын бөгөн үҙ күҙебеҙ менән күрәбеҙ. Илде, милләтте ана шундай тыумалар бөлгөнлөккә төшөрә. Кем ул тыума? Ул - никахһыҙ, йәғни Аллаһы Тәғәләнең ризалығынан тыш мал ише ғибрәт өсөн тыуған кеше. Тотош халыҡты илатып ултырыусы тыумаларҙы бик яҡшы беләбеҙ. Тыумалар беҙ дөрөҫ йәшәмәгәнлектән тыуа. Әгәр ҙә Ҡөрьән буйынса йәшәһәк, күп ҡатынлылыҡ рөхсәт ителһә, кешелек үҙен һәләкәткә алып барыусы күренештәрҙән ҡотолор ине.

## Эскелеккә ҡаршы...

1985 йылда ил буйынса эскелек менән көрәш башланғас, беҙ ҙә был кампаниянан ситтә ҡалманыҡ. Мин клуб мөдире инем ул саҡта. Эште "Ҡәйнәләр һәм килендәр" кисәһе ойоштороуҙан башланыҡ. Ул саҡта ҡәйнәләр һәм килендәр икмәктең генә 20 төрлөһөн бешереп ярышты. Беҙҙең инициативаны Көрәк, Исхаҡ, Буранғол ауылдары күтәреп алды. Шунан "Ҡарға бутҡаһы", "Ҡаҙ өмәһе" байрамдары береһе артынан икенсеһе ялғанып китте. Шунан һуң "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы үткәреү идеяһы менән ул саҡтағы районыбыҙ хужаһы Милләт Хәкимовҡа барҙым. Биш минут эсендә Хәкимов район активын йыйып алды. План төҙөнөк. Шунан мине кешеләрҙе йыя торорға тип ауылға ҡайтарып ебәрҙеләр. Ҡайтып етеп, кешеләремде лә йыйып өлгөрмәнем, ауылыбыҙға 10 машина теҙелешеп килеп инде. Ул мәлдә ауылыбыҙ емерек хәлдә ине. Район түрәләре менән һәр бер өйҙә күҙҙән үткәреп йөрөп сыҡтыҡ та, 20 көн эсендә ауылыбыҙ танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Байрамды тау башында үткәрҙек һәм унда бер кем дә бер ярты ла араҡы тотоп сыҡманы. Һыйҙы ауылдың көсө менән әҙерләнек. Байрам үткәс, Хөснөтдин кейәү менән икәүләп тау башынан һуңғы эскәмйәне икәүләп тотоп төштөк. Тау башында бер нәмә лә ҡалдырманыҡ. Унда сүп кенә түгел, бер буш шешә лә күренмәне.

Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең ауылды иң айыҡ ауыл итеп күрергә теләнек. Ҡыҙымдың туйын да эскеһеҙ үткәрҙек. Туйҙы тулыһынса уйнап-көлөүгә ҡорҙоҡ. Икенсе йылына тағы ла бер эскеһеҙ туй үткәрҙек. Берәү ҙә ҡаршы ла булманы,"ҡалай ҡыйын икән дә", тимәнеләр. Эскелек менән ғүмер буйына, бөгөн булһын көрәшәм.

## Ялҡаулыҡ дингә килергә ҡамасаулай

Аллаһы Тәғәләнән балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә, милләтемә именлекте түгелеп илап һорайым һәм һәр ваҡыт ул үҙенең ярҙамынан ҡалдырмай килә. Әлхәмдулиллаһ. Рәхмәт Уға. Динһеҙ йәшәүе анһат та ул, йыуыныу ҙа, гонаһтарыңдан таҙарыныу ҙа, сафланыу ҙа кәрәкмәй. Иң дөрөҫ йәшәү - динле йәшәү, шулай булғас, кем дин менән йәшәмәй - ул дөрөҫ йәшәмәй. Беҙ ошоғаса ҡоро һөлдә генә булып йәшәнек. Мин үҙем дә һөлдә булдым. Мин илаһам, Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыуым арҡаһында ғына илайым. Беҙгә дингә килергә нимәләр ҡамасаулай. Ул ен түгел, шайтандыр. Шайтан мине лә көтөп кенә йөрөй. Ҡайһы саҡ: "Тәүҙә ана һыйырыңды һау, намаҙыңды һуңынан уҡырһың", - тип тә әйтә ул. Ә намаҙҙы нәҡ ваҡытында уҡырға кәрәк, саҡ ҡына һуңлаһаң да, сауабы кәмей төшә. Шуға күрә күберәк "Ғасыр" тигән доғаны уҡыһам, йә "Салауат" әйтһәм, күңелем күтәрелеп, йырлағым килә хатта. Тик тауыш ҡына самалы. Баҡтиһәң, үҙендәге йөҙаҡты асыр өсөн 4400 тапҡыр "Салауат" доғаһын әйтергә кәрәк икән. Бер ниндәй ҙә дини һәм ғилми белемем булмаһа ла, Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм уның берҙән-бер генә икәнен яҡшы аңлайым. Күп кенә мәжлестәрҙә булырға тура килә. Ҡайһы бер урындарҙа өҫтәлдәргә араҡы ла ултырталар. Ундай өҫтәлдәргә ултырырға тырышмайым, бик тә бик ултырырға тура килһә, Аллаһы Тәғәләнән шундағы кешеләр исеменән ғәфү үтенәм.

Иң мөһиме: балаларым ғаиләле булдылар. Илле йәшенә етеп тә, ғаиләһен ҡора алмаусылар ҙа бар бит. Килендәрем оҡшамаһа, икенселәрен дә алып бирҙем. Оҡшамағанға көс төшөрөп тороу юҡ. Бөгөн бына етмеш йәшкә етеп ултырам. Барыһы ла хөрмәт итеп торалар. Кешенең ҡыуанғанына ҡыуанып, ҡайғырғанына ҡайғырып йәшәй белергә генә кәрәк был донъяла. Ялҡаулығыңды еңә белеү ҙә фарыз. Ялҡаулыҡ хатта дингә килергә лә ҡамасаулай. Көнөнә биш тапҡыр тәһәрәтләнеп, ваҡытында намаҙлыҡҡа ултырыу өсөн дә ялҡаулыҡты еңергә кәрәк. Бының өсөн ин тәүҙә үҙ-үҙеңде еңә белергә кәрәк. Дингә килеүең үҙ-үҙеңде, ялҡаулығыңды еңеү ҙә ул. Уйлап ҡараһың, бөтөн намаҙ ваҡыттарын бергә ҡушһаң, намаҙ өсөн көнөнә бер сәғәт кенә ваҡытың китә.

## Сәйер ғәҙәтебеҙ

Беҙҙең халыҡта бик ҡыҙыҡ бер йолаға әүерелгән хәл бар. Ҡунаҡҡа саҡырған ваҡытҡа йөрөмәйҙәр. Сәғәт 5-кә саҡырһалар - 6-ға, 7-гә, 7-гә саҡырһалар - 8-гә, 9-ға саҡ баралар. Ә мин иһә нәҡ саҡырған теүәл ваҡытҡа барам. Ҡайһы ваҡыт барған сағымда хужалар яңы саҡ ит һалған була. Ит бешкәнсе, бит бешеп, башҡалар килгәнсе 1-2 сәғәт көтөп ултырырға ла тура килгеләй. Шулайтып, ҡунаҡҡа ваҡытында йөрөй торғас, башҡаларҙы ла шуға өйрәттем. Миңә хәҙер ҡунаҡҡа 5 минутҡа ла һуңламай йөрөйҙәр. Үткәндә күршебеҙ ҡунаҡҡа саҡырҙы. Беҙ миненсә барҙыҡ, ашап-эсеп бөттөк. Әпәр итергә генә иткәндә бер ҡунағыбыҙҙың иң тәүҙә ҡатыны, шунан ҡәйнәһе, аҙаҡ үҙе килеп инде. Миненсә, ҡунаҡҡа һуңлап йөрөү ҡәҙерләп саҡырған кешене, үҙең һымаҡ саҡырылған башҡаларҙы һәм үҙеңде ихтирам итмәү билгеһе. Гонаһҡа тиң етешһеҙлек был. Элек сәғәт булмаған саҡта, киреһенсә, ҡунаҡҡа кеше сәғәттән дә теүәлерәк йөрөгән. Хужаның "көтөү ҡайтыуға", "шәмгә ут алғас" тигән саҡырыуҙарын барса халыҡ бер төрлө итеп аңлаған һәм ҡунаҡҡа саҡырылған ваҡытында йөрөгән. Кеше генә түгел, хатта мал да көтөүҙән ҡайһы ваҡытта ҡайтыуын алдан белеп, көн һайын сәғәте-минуты менән бер үк ваҡытта ауыл яғына боролоусан.

**Әхмәр Үтәбай яҙып алды.**

# ҠАБАЛАНМАҒЫҘ,

## бар бит әле...

***Меҫкенлек психологияһын күңелебеҙҙән йолҡоп алып ташларға кәрәк. Бахырланыусылар һәр милләттә бар. Беҙҙекеләр халыҡ исеменән бахырланырға яратыусан булыуы менән ҡурҡыныс. Эскән, йүнһеҙ, маҡсатһыҙ, кәмһетелгән, илауларға, меҫкенләнергә яратҡан, өмөтһеҙ, ялҡау, бөхәл кешеләргә һүҙ бирмәгеҙ, "Башҡорт шулай инде..." тип, халыҡ исеменән меҫкенләнеүҙе кәтғи тыйығыҙ. Күңелдә төшөрә торған һүҙ - йөгошло сирҙән дә алама. Ялҡаулыҡ, меҫкенлек - кешенең үҙ-үҙен юҡ итеү программаһы ул. Халҡыбыҙ эсә, тип һөйләүҙән туҡтап, "Башҡорт эсмәй", тигәнгә ғәҙәтләнәйек, ошоно һәр милләттәшебеҙҙең ҡанына һеңдерәйек.***

***"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.***

**КИЛМӘГӘН ИЛДӘР ҠАЛМАНЫ ӨФӨ ТАРАФТАРЫНА...**

### Замана ҡатындары

Замана ҡатындарының
Бар ҡулы алтындары.
Бер ҡарауҙа өтә торған
Иретер ялҡындары.

Замана ҡатындарының
Бар төрлө һөнәрләһе.
Бөтә донъяңды онотоп
Кинәнеп һөйәрлеге.

Замана ҡатындарының
Яндырғандары ла бар.
Ирем мине һөйә, тиеп,
Алданғандары ла бар.

Замананың ҡатындары
Кәпәс кейеп ир булды.
Ирҙәр иһә сәс еткереп,
Бисәләргә тиң булды.

Замананың ҡатындары
Ҡыуа кәсеп артынан.
Тир түгеүҙе онотҡолар,
Һатып кәпәс аҫтынан.

Замананың ҡатындары
Нигә бала тапһындар?
Баланы бит бағыу кәрәк,
Үҙҙәре ни ҡапһындар?

Замана ҡатындарына
Килде бөгөн хөрриәт.
Берен алыу, берен һалыу,
Уларҙа булған ниәт.

Әхирәттәр, һеңлекәштәр,
Әйтәм, ғәйеп итмәгеҙ.
Был донъяның тегеһе бар,
Сират үтә һәммәбеҙ.

* * *

Афарин, башҡорт егете
Ерем өсөн туҡмалған.
Ниндәй намыҫһыҙ ул бәндә -
Ҡул күтәреп үс алған?
Беҙҙең Әбйәлилдә һәр саҡ
Йоҙ(о)роҡта уйнайҙар.
Погон тағып, кеше алдап
Йөрөмәһен ундайҙар.
Һепертке менән ҡыуалап,
Таҙартығыҙ сафтарҙы.
Ер-Әсәгә оронмағыҙ,
Ишетегеҙ аһ-зарҙы!

* * *

Килмәгән илдәр ҡалманы
Өфө тарафтарына.
Кабы "ем" булып ҡуймағыҙ
Илдең ҡараҡтарына.

"Бисмилла", тиеп баҫһындар
Өфө тупһаларына.
Яҡшы данығыҙ таралды
Илдең ҡитғаларына.

"Собханалла" тип әйтһендәр,
Башҡортостанды күргәс.
Һәр яҡтан да беҙ өлгөлө,
Етәксе үҙе белгәс.

Сит ил батшалары килә,
Ике күҙе майланып.
Беҙҙең уныштарҙы күреп,
Ҡайтып китә яланып.

Өҫтө йәннәт, аҫты зиннәт
Башҡортостан иленең.
Шаҡы-шоҡоға алдатып,
Һурмаһындар елеген.

Егерме беренсе быуат
Хәйергә генә булһын.
Быуатҡа хужа булырҙай
Йәш Рәхимовтар тыуһын.

* * *

Кемдәр генә ҡул һонмаған
Еремдең байлығына!
Башҡортостан ере ҡалған
"Бер япраҡ саҡлы ғына..."

**Вәсилә САДИҠОВА.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ



# ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ БЕҘ,

## шулай булып ҡалайыҡ

**Башҡорттоң тәбиғәт балаһы булыуына, бөрәүгә лә зыян килтермәй, һыйышып йәшәй белеүенә хайран ҡалаһың. Уны ул үҙе лә һиҙмәй, сөнки был халәт уның ҡанында. Был фекерҙе иҫәпһеҙ-һанһыҙ миҫалдар менән нығытырға була, тик мин бер нисә осраҡты ғына яҙып ебәрәм.**

Йылайыр районының бер төпкөл ауылында тик башҡорттар ғына йәшәгән. Ауыл эргәһендә бик матур күл була. Унда балығы ла, ҡыр өйрәктәре лә тулып йөрөй. Тирә-яғы ҡамышлыҡ, тал-тирәк. Хатта аҡҡоштар ҙа ирәйеп, үрсеп киткән була. Бик күп йылдар башҡорттар күлдәге күркәм тормошҡа һоҡланып, бер-береһенә: "Ҡамасаулыҡ итмәйек. Зыян килтермәйек!" - тиеп, берен-бере иҫкәртеп, үҫеп килгән балаларҙы ла шуға инандырып йәшәр булған.

Ләкин йылдың ямғырлы бер көҙгө көнөндә бер башҡорттоң знакум урыҫы бата-сума ауылға машинала килеп инә һәм туп-тура күл ярына барып туҡтай. Сөнки ошо ваҡиғанан бер нисә көн алдараҡ знакумдың башҡорт дуҫы: "Беҙҙең ауыл янында күл бар. Унда аҡҡоштар үрсеп китте. Күл өҫтө тулып йөрөй. Үҙҙәре матурҙар!" - тип, знакумына һөйләп ҡайтҡан була. Йәнәһе, ғорурлана, маһая. Знакум башҡорт дуҫының һүҙҙәренең хаҡлығын үҙ күҙҙәре менән күрә: күл өҫтө тулы оло аҡҡоштар, ҡыҙғылт-һоро төҫтәге балалары. Тып-тыныс, ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй, иркенләп йөҙөп йөрөйҙәр.

Ә знакум кәмәһенә һауа тултырып ала ла, күл уртаһына барып етеп, аҡҡоштарҙы сүпләй ҙә башлай. Ата аҡҡоштар хәүефте тиҙ төшөнә, ҡасырға өлгөрә, ә инә аҡҡоштарҙың күбеһе, балаларын ҡурсалап, мылтыҡ ҡорбанына әйләнә. Шулай, унлап аҡҡошто знакум күл өҫтөнән йыйып ала, машинаһына тейәй ҙә ҡайтыр юлға сыға. Сөнки был вәхшилекте күреп, күл буйына килеп еткән ауыл халҡы знакумды әрләй башлай. Әлбиттә, улар үҙҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Ни тиһәң дә, урыҫтың ҡулында мылтыҡ, етмәһә, үҙе вазифалы кеше. Ҡайны берәүҙәр күҙ йәшен дә йәшермәй. Аҡҡоштарҙың байтағы иҫән дә ҡала, әммә улар элеккесә ирәүәнләп йөҙөп йөрөмәй. Бер-ике көндән йылы яҡҡа китергә һауаға күтәреләләр. Киләһе йыл яҙ был күлгә аҡҡоштар килмәй. Төшмәй, туҡтамай ғына үтеп китәләр...

Ейәнсура районының хозур тәбиғәтле ете бөгөл тауҙарынан юл буйлап төшкән ерҙә Аҡкондоҙ исемле матур ауыл бар. Уның янында ғына текә тау. Ул тауҙың итәгендә ауыл зыяраты. Ололар һөйләүе буйынса (күптәре мәрхүм инде), тауҙың урта биленән үрҙәрәк борон сылтыр шишмә булған. Уның һыуын "тереһыу" тип иҫәпләгәндәр, сөнки ул шул тиклем саф, һалҡын, тәмле була, яҫы-яҫы таштарҙы өҫкә мендереп, шишмәнең тирә-яғын бурап, биҙәп ҡуя ауыл бөхлеүәндәре. Ултырып ял итергә, тирә-йүнгә, тәбиғәткә һоҡланып, тормошҡа, йәшәйешкә шөкөр итеп, доға ҡылып, намаҙҙар уҡып ҡайтырға мөмкин була. Ҡатын-ҡыҙҙар эсәр һыуҙы шул шишмәнән биҙрәләренә сүмес менән генә йыйып алып (һыуы үтә мул булмаған), тамсыһын да сайпылтмай ғына, биҙрә өҫтөнә таҙа сепрәк ябып алып ҡайтыр булған. Шишмә һыуын бысратыу, әрәмшәрәм итеү, шишмә янында тауышланыу, ҡысҡырып көлөү йә һөйләшеү ҡәтғи тыйылған. Шишмә һыуының сафлығын һаҡлағандар, шишмәнең үҙен шул тиклем дә ныҡ ҡурсалағандар.

Революциянан һуң донъялар үҙгәреп, кешеләр динһеҙгә әйләнеп, шишмә янында доғалар ҡылынмай башлағас, был шишмә лә эҙһеҙ юғала, үҙенән-үҙе юҡ була...

Беҙҙең Баймаҡ районында һәр ғаиләгә сабынлыҡ бүлеп бирелә. Сабынлыҡтар ата-әсәләрҙән балаларға мираҫ булып ҡала килә. Шулай итеп, бер тоҡомдоң бер нисә быуыны ғүмере буйы бесәнде бер үк урында саба. Сәй, аш-һыу әҙерләү урыны ла унар, егермешәр йыл буйы билдәле бер генә урында, ял иткәндә лә шул тирәлә генә була. Бесәнлек тирәһендәге ағастарға, ҡыуаҡлыҡтарға зыян килтерелмәй, йылға йә шишмә һыуы бысратылмай. Шуғалыр ҙа, кеҙ көнө бесәнселәр ҡайтып бөткәс, сабынлыҡтарға килһәң, сәй эскән, ял иткән урындарҙы билдәләп тә булмай. Сөнки усаҡ яҡҡан урынға яҡын, ҡоламаған, ҡыуармаған йәш ҡайындарҙы йыҡып утын итеү, хатта түҙын һыҙырыу ҙа гәйеп. Утынға ҡороған йә ҡолаған ағастарҙы ғына файҙаланалар. Тағы ла бер күркәм үҙенсәлек бар Баймаҡ халҡында. Бесәнселәр бер ҡасан да күршеһе сабынлығына сыҡмай. Был - ҡанун, яҙылмаған закон. Уны бер кемдең аша сыҡҡаны, аяҡ аҫтына һалып тапағаны юҡ, минеңсә.

Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл төбәге Ейәнсура районының Абзан ауылында бер үк заманда ике Ғүмәр йәшәне. Уларҙың һәр ҡайһыһының ҡушаматы ла бар ине: олорағы - Ҡыҙыл Ғүмәр, икенсеһе - Ҡара Ғүмәр. Улар икеһе лә ярышып үҫкән дәү ҡарағай менән дәү ҡарағас кеүек, баһадир кәүҙәле, эшсән, етди кешеләр ине. Һәр береһенең тормош юлы китаптарға торош итерлек. Ҡыҫҡаса ғына улар тураһында иҫкә алыуҙы мин үҙ бурысым һанайым. Ҡара Ғүмәр ҙә, Ҡыҙыл Ғүмәр кеүек үк, бик намыҫлы һәм намыҫсан ине. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында ул әүҙем комсомолец булып, партия етәкселәренең күҙ осона эләгә: уны маҡтайҙар, төрлө конференцияларға делегат итеп ебәрәләр, йыйылыштарҙа президиумға күтәреп ултырталар. Әммә совет органдарында эшләгән етәкселәргә, йәғни түрәләргә Ҡара Ғүмәрҙең бер яғы һис кенә лә оҡшап етмәй. Сөнки Ҡара Ғүмәр үҙе оҡшатып йөрөгән ҡыҙына өйләнә. Ә ул ҡыҙ байҙар (кулактар) тоҡомонан була. "Алдынғы ҡарашлы комсомолец бай ҡыҙына өйләнеп, уның менән йәшәргә тейеш түгел. Айырырға тейешһен. Тыңламаһан, комсомолдан ҡолаҡ ҡағаһын..." - тип, Ҡара Ғүмәрҙе ҡатынын айырырға мәжбүр итәләр һәм ауылдың иң сибәр комсомолкаһына - Шәһизәгә өйләнергә ҡушалар. Ҡара Ғүмәр, бик ыңғай кеше булараҡ, тиҙ арала ҡатынын айырып ҡайтыра ла, комсомолка Шәһизә менән ҡыҙыл туй үткәреп тә ҡуя. Уларҙың ғаиләһе өлгөлө комсомол ғаиләһе буласаҡ, тип, өр-яңынан ҡарағай бура күтәреп, бер ай эсендә күмәк көс менән өй эшләп индереп тә ҡуялар. Эшкә уңған, тырыш Ҡара Ғүмәр өйөн сынъяһау итеп биҙәй. Йорттары ул саҡтағы сама менән иң күркәм, иң ҙур өйҙәр рәтендә була. Тирә-яғын да нығыта. Өй тирәләй ҡарағай, ҡайын, ҡарама ағастарын да, емеш ағастарын да ултырта. Тик Ҡара Ғүмәр өҫтөнлөктө емеш ағастарына бирмәй, ә урман үҫтерергә хыяллана. Ысынлап та, беҙ иҫ белгәндә уларҙың өйө урман эсендә ҡалғайны инде. Ул шәһеҙ тора алмай. Шәһизә лә ергәрле булып сыға. Улар күпме ағас ултыртһа, шунса ағас тиҙ генә үҫә лә китә икән. Кешеләр уның тураһында: "Ҡара Ғүмәр ағасты йолҡоп алып ҡына ултыртһа ла үҫә лә китә!" - тип һөйләй торғайны.

Уңған ғаиләлә ике ул, бер ҡыҙ үҫеп етә. Комсомол өйө лә иҫкерә. Ҡара Ғүмәр яңынан өй һалырға була, яңы өйөнөң дә иҫке өйө кеүек баҡсаға күмелеп, урман эсендә ултырыуын хәстәрләй. Иҫке өйҙө лә боҙоһо килмәй. Шуға күрә яңынан төҙөләсәк өйгә урынды ҙур баҡсаның бер яҡ ситенәнерәк, мөйөштәнерәк һайлай.

Өй күтәрәһе урынға бер ҡарама ағасы тап килә. Ни эшләргә? Өмәселәр: "Был ҡараманы бысып ташлайыҡ!"- тип ныҡышып икән. Ҡара Ғүмәр ҡырҡа ҡаршы төшә: "Юҡ. Был ҡараманы йыҡмайбыҙ. Әрәм була. Миңә барлыҡ ағастарым да балаларым кеүек ҡәҙерле!" - тип, күҙ йәше менән ҡаршылаша. Өмәселәргә юлын да әйтеп бирә: "Карама өй эсендә ҡалырға һәм үсеүен дауам итергә тейеш!" тигән талап ҡуя. Мәшәҡәтле өмә дауам итә. Ысынлап та, ҡараманы өмәселәр йәрәхәтләмәй генә, һаҡсыл ғына ҡыланып, өй эсендә ҡалдыралар. Ҡарама өй түбәһенән үтеп, ҡыйыҡтан да аша сығып йәшәүен дауам итте бер нисә йыл. Ә өй эсендә ҡалған өлөшө өр-яңы өйҙә терәү кеүек торҙо. Унда бер һыҙырылған эҙ ҙә булманы. Шулай ҙа өй эстәре бөхтә ине. Мәжлестәрҙә иң ҡәҙерле ҡунаҡ ҡарамаға арҡа терәп ултырыр ине. Ғәйепләү юҡ. Сөнки һәр кем был ҡараманың тарихы менән таныш, хәбәрҙар ине.

Башҡорт - тәбиғәт балаһы булараҡ, тәбиғәткә, ер-һыуға, ағас-ҡыуаҡтарына, йәнлектәргә зыян килтермәй йәшәргә тырыша. Һәр хәлдә, беҙҙең ата-бабалар шулай йәшәгән. Шуға ла гәзиз тыуған илебеҙ Башҡортостаныбыҙ - хозур тәбиғәт мөйөшө бит.

**Рәүф БИКТАШЕВ.**

> *Халыҡтың күңелен ҡуҙғатыуҙың, йөрәген уятыуҙың иң йоғонтоло сараһы - динге ҡайтыу. Шөкөр, һуңғы ваҡытта йәштәребеҙ күпләп дингә ылыға. Башҡорт динде күңеле, йөрәге менән ҡабул итә торған милләт. Башҡорт үҙенең күңеле, ҡылған ғәмәле менән дини асылына тоғро. Беҙҙең дингә килгән йәштәрҙә шуныһы һөйөндөрә: улар дингә ысын инаныу аша килә. Рухи ҡыйралыш динебеҙҙән ситләшкәс башлана. Рәсәй Федерацияһы етәкселеге башҡорттарҙың дингә килеүен һис өнәмәй. Улар беҙҙең йөрәктәребеҙҙе уятыусы, халыҡты туплаусы көс асҡысының диндә икәнлеген бик яҡшы белә. "Кем дә кем ҡушҡанды үтәмәй, динен инҡар итә, улар бөтөрөләсәк", - тип әйтелә бер хәҙистә. Хоҙай асыуынан һаҡланайыҡ.*
>
> *"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.*

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ТАУҘАЙ АУЫРЛЫҠТЫ ЕҢ...

## йәшәү ҡәҙерен белер өсөн

● Күк йөҙөндә аҡ һәм ҡара болот - ағына ҡарап аҡлан, паклан, ҡараһынан һаҡлан. Тормошта ла шулай: аҡ күңелле кеше ярҙам итер, ҡара эслеһе ярҙан этәр.

● Мәжлестә йырлап ҡына йырсымын, тип уйлама, көләмәс һөйләп көлдөрөүҙән сәсәнмен, тип маҡтанма - һәр нәмәнең үҙ бизмәне.

● Тормоштоң ҡырҡ сатаһы ҡырҡҡа түкмәстереп һуғыр - һәр береһенә түҙ, һыр бирмәйем, ҡанат ҡалҡытам, тип тырмашып йәшә - ысын кеше булырһың, маҡсатыңа ирешерһең.

● Файҙаһы тейгән еңеллеккә ирешеү өсөн тауҙай ауырлыҡты ең, ете ҡат тирең сыҡһын - донъяла йәшәү мәғәнәһен һәм ҡәҙерен белерһең.

● Сабауыллап алдан хәбәр һөйләмә: өрә белмәгән эт йортона йә ҡараҡ, йә кәрәкмәгән ҡунаҡ килтерә.

● Аш күплектән хаттин ашып, аслыҡтағы ҡойҡанды туҡҡа сыҡҡас онотма.

● Күңелеңдә уҫаллыҡ, яуызлыҡ булмаһын - ундайҙың теленән йылылыҡ таммай.

● Илең ташлап сит яҡтарға атлыҡма: ситтә лә гел ситәнгә элмәйҙәр, күп осраҡта йоҙроҡ менән елләйҙәр.

● Алдымда ризыҡ күп, тип, һәр береһенә һоғаланма, тәнгә сихәтлеһен генә һайла, һау-сәләмәт тә, туҡ та булырһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙӘХӘТ ИТЕҮ...
## ғүмерҙе оҙайта

■ Ҡарбуз организмдан шлактарҙы ҡыуып сығарыуҙан тыш, кәйефте лә күтәрә икән. Техастағы "Эй энд Эм" үҙәге тикшеренеүселәре билдәләүенсә, ҡарбуз составындағы аминокислоталар йәшәү көсөн арттыра, кәйефте күтәрә. Белгестәр бының өсөн көнөнә 300 грамм ҡарбуз ашарға тәҡдим итә.

■ Йөрәк ауырыуҙарынан, шул иҫәптән, инсульттан һаҡланам, тиһәгеҙ, әйҙә ултырмағыҙ, ә күберәк сәйәхәт итегеҙ. Канаданың Торонто университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ғүмере буйы бер ҡалала ғына йәшәүселәргә ҡарағанда, йәшәү урынын алыштырырға яратыусылар араһында инсульт кисереүселәр 30 процентҡа һирәгерәк осрай. Сәйәхәт яратыусылар ҙа йөрәк сирҙәренә бирешеп бармай икән.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервылар көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы япраҡтарын АҠШ-та ла тикшереп ҡарағандар. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә.

■ Көнсығыш һәм Урта диңгеҙ халыҡтары аш-һыу әҙерләгәндә яратып ҡулланған зәғфәрән (шафран) тәмләткесе оло кешеләрҙең күҙҙәрен һуҡырайыуҙан һаҡларға ярҙам итә. Австралия һәм Италия ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр ваҡытында оло йәштәге кешеләр өс йыл дауамында зәғфәрән ҡулланған һәм уларҙың күреү һәләте бермә-бер яҡшырған. Был тәмләткесте ҡулланыуҙан туҡтау менән күреү һәләте лә насарая башлаған. Ғалимдар билдәләүенсә, зәғфәрән оло йәштә һуҡырайыуҙан ҡотҡарып ҡына ҡалмай, ә тәбиғи ҡояштан һаҡлаусы күҙлек ролен дә үтәй һәм күҙҙәрҙе сағыу ҡояш нурынан зарарланыуҙан һаҡлай.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составындағы ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итеү һәләтлеге кәмеүенә, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Борон заманда уҡ көртмәлене ашҡаҙан ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланғандар. Швецияның Лунда университеты ғалимдары ла уның ашҡаҙан-эсәк трактына ыңғай тәьҫир итеүен асыҡлаған. Көртмәле эсәктәрҙе ялҡынһыныуҙан, сей яралы колиттан һаҡлай. Ғалимдар көртмәлене лакто- һәм бифидобактериялар менән бергә ҡулланып ҡараған. Был саҡта ҡан эсәк күҙәнәктәренә кәрәк булған энергия сығанаҡтары - май һәм пропин кислоталарына байый.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Америка яҙыусыһы Джером Лоуренстың әйткәне бар: "Журналистиканың бурысы - үтә ҡуҙғығандарҙы тынысландырыу һәм үтә тыныстарҙы ҡуҙғытыу". Егерме беренсе быуат башы журналистикаһына бик тә тап килеп торған һүҙҙәр был. Бигерәк тә башҡорт милли журналистикаһына. Сөнки яңы мең йыллыҡта баҫма матбуғаттың, телевидение, радио һәм Интернеттың йәмғиәттәге роле, милләтте берләштереүҙәге, халыҡты туплауҙағы бурысы айырыуса юғары. Һәм был оло миссия тәү сиратта шул мәғлүмәт сараларында эшләүсе журналистарҙың профессиональ кимәленә бәйле.**

# ТЫНЫСТАРҘЫ ҠУҘҒЫТА,
## ҡуҙғығандарҙы тынысландыра аламы журналист?

Көн талаптарына яуап бирерлек, замандың социаль заказын үтәй алырлыҡ, замандаштарыбыҙҙың талапсан зауығын, сәйәси, ижтимағи ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек үткер ҡәләмле, тос фекерле, йор һүҙле, осҡор күҙле журналистарыбыҙ бармы һуң? Һан йәһәтенән - бар. Был - бәхәсһеҙ. Сөнки бөгөнгө гәзит-журналдарыбыҙҙа, радио һәм телевидениела буш вакансиялар бар, уларҙы тултыра алмай йонсойбоҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Ә быны булған кадрҙарға сифат яғынан бер һүҙ менән генә баһа биреүе еңел булмаҫ.

Сер түгел - һуңғы йылдарҙа милли баҫмаларҙың тиражы кәмей бара. Был күренештең сәйәси, иҡтисади, социаль тетрәнеүҙәр кеүек объектив сәбәптәре етерлектәр, электрон мәғлүмәт сараларының артыуы, уларҙың йылдан-йыл киңерәк ҡолас йәйеүе һымаҡ күренештәр ҙә үҙенекен эшләй. Әммә был сәбәптәрҙең субъектив булғандары ла юҡ түгел бит. Шуларҙың береһе - журналистарҙың профессиональ әҙерлегенә ҡайтып ҡала ла инде. Егерме беренсе быуат башында, үткән быуаттың уртаһында йәшәгән һәм эшләгән кешеләр яҙған кеүек яҙып, гәзит-журналдың тиражын арттырып булмай. Бөгөн мәғлүмәт баҙары шул тиклем бай, бер үк яңылыҡты һәр тарафтан ишетергә, күрергә, уҡырға мөмкин. Шуға күрә әле төп принциптарҙың береһе шул булыр: нимә яҙыуың ғына түгел, нисек яҙыуың да мөһим. Йәғни, авторҙың яҙыу һәләтенән башҡа фекерләү ҡеүәһе, уйлау даирәһе, уның интеллектуаль кимәле, стиль үҙенсәлеге талап ителә. Асығын әйтергә кәрәктер, мәғлүмәт баҙарында был күрһәткестәр йәһәтенән беҙ әлеге мәлдә донъяуи һәм Рәсәй баҫмаларына ысын конкурент була алмайбыҙ. Быны танырға, әйтергә, уйланырға һәм аныҡ хәл ҡылырға ваҡыт. Беҙҙең тармаҡта Башҡорт дәүләт университеты кадрҙар йәһәтенән төп мәктәп. Йыл һайын башҡорт журналистикаһы факультетын егерме биш-утыҙ студент тамамлай. Тик, үкенескә күрә, бөгөн редакцияларға эшкә килгән йәш белгестәрҙең күбеһе тик бирелгән темаға инша яҙырға ғына һәләтле.

Быйыл Башҡортостан Республикаһы яңы Рәсәй составындағы үҙаллылығының егерме йыллығын билдәләй. Ҡаҙаныштар бихисап, ҡыуаныстар күп. Башҡорт телендә сыҡҡан матбуғат сараларының һаны ғына ла хәҙер етмештән ашты. Тик журналистикала ғына артыҡ маҡтанырға урын юҡ һымаҡ. Сөнки ошо йылдар һуҙымында аналитик журналистика, публицистика юҡҡа сыҡты тиерлек. Заманында үткер мәҡәләләре, ҡыйыу фекерҙәре, эшлекле эҙләнеүҙәре менән заман менән бергә атлау ғына түгел, унан алдараҡ та барған Ризуан Хажиев, Мәхмүт Хужин, Марсель Ҡотлоғәлләмов, Рәүеф Насиров, Сәлимйән Бәҙретдиновтарға алмаш килдеме? Ҡапыл ғына әйтеүе лә ауыр. Әлбиттә, матбуғатта ваҡыты менән З. Әйле, Рәлис Ураҙғолов, Дамир Шәрәфетдиновтарҙың исемдәре яңғырап та ҡалғайны. Әле тынлыҡ тиерлек. Таһир Ишкинин тигән сәйәси аналитика оҫтаһының яңғыҙы майҙан тотоуын иҫәпләмәгәндә ин-

***Ислам тәғлимәте "Уҡы!" тигән саҡырыуҙан башлана. Аҡ ҡағыҙға яҙылғандарҙы уҡып аҡыл йыябыҙ, дөрөҫ уйларға өйрәнәбеҙ. Һәр башҡорт үҙ туған телендә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырырға, уҡырға, улай ғына түгел, шул баҫмаларҙың уның ихтыяжына яуап бирерлек, һорауҙарына яуап табырлыҡ рух сығанағы булыуына өлгәшеү өсөн уларҙың нәшер эшендә ҡатнашырға тейеш.***

***"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.***

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

# ТӘҮӘККӘЛЛЕК ҺӘМ ТЫРЫШЛЫҠ...
## уңыштың төп нигеҙе

**Көнкүреш хеҙмәтләндереүе предприятиеһы нимәнән башлана? Клиентыңа иң юғары кимәлдәге, яҡшы сифатлы хеҙмәтләндереү тәҡдим итеү, үҙ эшеңде энәһенән ебенә тиклем белеү теләгенәндер, моғайын. Ошо тармаҡҡа утыҙ биш йылдан ашыу тоғро хеҙмәт иткән Рәйлә Ғариф ҡыҙы ФӘСХЕТДИНОВА бөгөн дә өлгәшкән уңыштары менән сикләнеп ҡалмай, һаман да эҙләнеүҙәр юлында.**

Замана ауырлыҡтары алдында бөгөлөп төшмәгән, ҡайһы саҡта ирҙәр күтәрмәҫтәй йөктө нескә иңдәренә һалып, уны лайыҡлы башҡарып сыҡҡан гүзәл заттар байтаҡ арабыҙҙа. Үткән быуаттың 80-се йылдарында "Башхимчистка"ның кер йыуыу цехы базаһында барлыҡҡа килгән "Ғәлиә" предприятиеһының бөгөнгө көндә баш ҡала иң алдынғы ойошмаларҙың береһе булып китеүе уның директоры Рәйлә Ғариф ҡыҙының тәүәккәллеге, ҡыйыулығы, тырышлығы һөҙөмтәһе. Шулай булмаһа, хеҙмәтләндереү-сәнәғәт тармағында 90-сы йылдарҙа уҡ үҙгәртеп ҡороу эштәрен башлап, ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә иң артта ҡалған тип иҫәпләнгән технологиянан замандың иң алдынғы ҡаҙаныштарына тиклем юл үтә алыр инеме икән "Ғәлиә" предприятиеһы?

1997 йылда Рәйлә Ғариф ҡыҙы Америкала үткән химик таҙартыу һәм кер йыуыу предприятиелары өсөн ҡоролмалар күргәҙмәһенә бара һәм "FIRBIMATIC" итальян фирмаһы менән ҡоро химик таҙартыу ҡоролмаһын алыуға килешеү төҙөй. Һуңыраҡ предприятие "FENICE" итальян фирмаһының алдынғы технологияларын ҡуллана башлай, химик таҙартыу өсөн итальян, немец, француз препараттары һатып алына, предприятие хеҙмәткәрҙәре Мәскәүҙә белемен камиллаштырып ҡайта. Ошонан һуң "Ғәлиә"лә Бельгияның "IPSO" фирмаһы ҡоролмаларында һыу ярҙамында кейем, "RARCHER" немец ҡоролмаларында балаҫтар һәм йомшаҡ йыһаздар таҙартыу эше лә яйға һалына. Бөгөн химик таҙартыу цехтары "IPSO", "BOWE", "BUFA" һәм "FIRBIMATIC" фирмалары ҡоролмалары менән йыһазландырылған. "Ғәлиә" предприятиеһында бөтә донъянан ҡоролма һәм материал етештереүселәр ҡатнашлығында семинарҙар үткәреү ҙә күркәм йолаға әүерелгән.

"Ғәлиә" предприятиеһы халыҡҡа яңынан-яңы хеҙмәт төрҙәре тәҡдим итеүен дауам итә. Тәбиғи тире, замша, нубуктан тегелгән әйберҙәрҙе таҙартыуҙан тыш, бында жалюзи, сәхнә шаршауҙарын таҙартыу, тирене реставрациялау, кейемде таманлау кеүек һорауҙар менән дә мөрәжәғәт итәләр. Көнкүреш хеҙмәтләндереүе тармағы үҫешенә ҙур көс һалыусы, химик таҙартыу һәм кер йыуыу буйынса 100-ҙән ашыу хеҙмәт төрө тәҡдим итеүсе предприятие директоры Рәйлә Ғариф ҡыҙы етәкселек иткән коллектив парикмахер хеҙмәте, балаҫ ситтәрен тегеү һәм аяҡ кейемдәре ремонтлау эшенә лә тотонған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Әгәр уңышлы эшҡыуар булырға һәм эшегеҙҙең алға китеүен теләһәгеҙ - юлығыҙҙа осраған ауырлыҡтарға иғтибар итмәгеҙ, ҡыйыуыраҡ булығыҙ, тышҡы баҙарға сығығыҙ, ҡуйған маҡсатығыҙға ирешеү өсөн барыһын да эшләгеҙ, ишектәргә ҡыйыуыраҡ шаҡығыҙ", - тип әйтергә ярата йәш коллегаларына Рәйлә апай. Халыҡҡа күрһәткән хеҙмәт сифаты халыҡ-ара стандарттарға ярашлы булған "Ғәлиә" предприятиеһының ҙур уңыштарға өлгәшеүендә уның директорының ихлас күңелле һәм ярҙамсыл булыуы һәм, әлбиттә, беренсе урынға бер ҡасан да күп мая туплау түгел, ә халыҡ ышанысын яулау маҡсатын ҡуйып эшләүе лә ыңғай йоғонто яһамай ҡалмайҙыр. Сөнки бөгөнгө заман күркәм сифаттарын юғалтмаған кешене бар ҡиммәттәрҙән дә өҫтөнөрәк баһалай.**

де. Барыбер ҙә әүҙем, яугир публицистика заманы үтте, тип ирәүәнлеккә бирелеп китергә иртәрәк әле беҙгә...

Әлбиттә, Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ профессиональ әҙерлек проблемаһын күрмәй ҙә, белмәй ҙә тип әйтеп булмай. Төрлө йүнәлешле, төрлө маҡсатлы уҡыуҙар, курстар, семинарҙар үткәрелеп тора. Мәҫәлән, былтыр ғына бик йөкмәткеле, фәһемле һәм көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәргән ике сара-һабаҡтар булған. Тик былар системалы эштән бигерәк, берике тапҡыр эшләнелә торған инъекция ғына. Ә системалы эш мәктәптәрҙә профилле эштән, юғары уҡыу йорттарындағы заманса маҡсатлы уҡытыуҙан башланырға тейеш.

Кадрҙар мәсьәләһенә килгәндә тағы ла бер мәлгә айырым иғтибар йүнәлтергә кәрәктер. Ул да булһа - Интернет. Беренсенән, бөгөн башҡорт Интернет журналистикаһы юҡ кимәлендә. Булғаны саҡ тәпәй баҫа башлаған сабый хәлендә. Интернет яҡшы нәмәме, насармы - ул хаҡта бәхәс туҡтарға тейеш. Ул - ысынбарлыҡ. Беҙ бынан бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ. Йә Интернет башҡортса һөйләшә башларға тейеш, йә беҙҙең виртуаль уҡыусыларыбыҙ башҡа даирәгә китә. Әлеге көндә саф башҡорт телендә һөйләшкән Интернет ресурстарҙы һанарға бер ҡулдың бармаҡтары ла етә. Интернет журналистика юҡ тинем, ә ул булһын өсөн, тәү сиратта, телде лә, компьютер технологияларын да, журналистика үҙенсәлектәрен дә белгән веб-мастерҙар, веб-администраторҙар кәрәк. Ә улар юҡ. Бөгөнгө милли Интернет ресурстарҙы булдырыусы, хеҙмәтләндереүсе белгестәр барыһы ла үҙ аллы өйрәнгән һәүәҫкәр-энтузиастар. Бәлки, берәй уҡыу йорто базаһында, йә шул уҡ БДУның журналистика факультетында бөгөнгө редакцияларҙың ихтыяжын иҫәпкә алып, журналистиканы, Интернетты ла өйрәнәсәк 10-20 кешенән торған махсус төркөм булдырырғалыр? Киләсәктә барыбер Интернетты күрмәмеш тә белмәмеш булып йәшәп булмаясаҡ.

Башҡортостан Республикаһы Йәмәғәт Палатаһының "2009 йылда Башҡортостан Республикаһында граждандыҡ йәмғиәтенең торошо һәм үҫеше" исемле докладында бөгөнгө матбуғатҡа ҡарата бик етди һүҙҙәр әйтелгән. Шулар араһында кадрҙар мәсьәләһенә йоғонто яһарҙай тенденциялар ҙа билдәләнә. Берәүһенә генә туҡталып китер инем. "Һәм, ниһайәт, эш хаҡының түбән булыуы һәм журналист һөнәренең абруйы түбәнәйеүе хәүеф тыуҙыра", - тиелә унда. Ғөмүмән, матбуғат тураһында әйтелһә лә, башҡорт милли матбуғатына ла туранантура ҡағыла был һүҙҙәр. Әлбиттә, донъяуи иҡтисади көрсөк шауҡымынан азат булып булмай, шуға ла бөгөн үк эш хаҡын башҡа өлкәләр менән тигеҙләүҙе лә талап итеп булмай. Тик ниндәйҙер билдәле социаль гарантиялар һаҡланып ҡалырға тейештер. Шул иҫәптән журналистарҙы торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса ла. Республика етәкселегенә Рәсәй кимәлендә танылыу яулаған "Үҙ йортом" программаһын тормошҡа ашырғаны өсөн оло рәхмәт - йылдар һүҙымында йыйылып килгән быуа йырылғандай булды, тиҫтәләрсә журналист, бюджет өлкәһендә эшләүсе башҡа коллегалары менән бер ҡатарҙан, Хаҡ Тәғәләнең ихтыяры һәм етәкселегебеҙ ярҙамы менән ҡыйыҡлы булыу бәхетенә өлгәште. Кеше яҙмыштарын, ғаилә яҙмыштарын һәм хатта милләт яҙмыштарын хәл итеүсе был программа артабан да эшләр, тип ышананабыҙ. Тик башҡорт милли матбуғаты тигән төшөнсә - ул тере организм, һәр ваҡыт хәрәкәттә, үҫештә, редакцияларҙа туҡтауһыҙ быуындар алмашыныуы бара. Ошондай ваҡытта йәш коллегаларҙы һыйындырып торор, ваҡытлыса торлаҡ мәсьәләһен хәл итер дөйөм ятағыбыҙ ҙа булырға тейеш. Әй урамындағы 1-се профлицейҙың дөйөм ятағында журналистар өсөн тотош бишенсе ҡат тәғәйенләнгән, әлбиттә, әммә ул ғына етмәй.

Беҙҙең ҡаҙаныштар, табыштар, еңеүҙәр һәр саҡ күҙ алдында. Иң мөһиме, заманалар буталған, ҡиммәттәр алышынған бола йылдарҙа беҙ башҡорт милли матбуғатын һаҡлап ҡына ҡалманыҡ, ә уны яңы бейеклеккә күтәреүгә өлгәштек. Тик ошо бейеклекте тотоп ҡалыу, үҙебеҙҙең бөртөкләп кенә йыйған уҡыусыбыҙҙы юғалтмау өсөн ара-тирә әйләнәбеҙгә күҙ ташлап, ҡолаҡ һалып, заманыбыҙ пульсын самалап, үҙебеҙҙең ил һәм милләт алдындағы бурыстарыбыҙҙы барлап торорға тейешбеҙ.

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ ШУЛ!*

# БАЙЛЫҠ -АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ БҮЛӘГЕ

## йәки Башҡорт эшҡыуары образы нисек булырға тейеш

**Бер туҡтауһыҙ үҫешкән, камиллашыуға ынтылыу тәбиғәтенә һалынған кеше генә уңышлы эшҡыуар була ала. Бер хәҙистә былай тиелә: "Кемдең кисәге көнө бөгөнгөһенә оҡшаш, шул отола". Ошо принципты һаҡламаған эшҡыуар уңышһыҙлыҡҡа дусар. Уңышлы эшҡыуарлыҡтың икенсе үҙенсәлеге булып эшмәкәрлек ысулдарының һәм төрҙәренең үҙгәреүе, алмашыныуы тора. Ни өсөн тигәндә, кисә йә бөгөн етештерелгән тауар иртәгә кәрәк булмауы ла бар бит. "Балаларығыҙҙы үҙегеҙ йәшәгән заман рухында түгел, улар үҙҙәре йәшәйәсәк заман рухында тәрбиәләгеҙ", тип әйткән Али. Ислам принциптары бар донъяға таралған заманда беҙ мосолмандар күпләп йәшәгән республика вәкилдәре булараҡ, өс йүнәлеш буйынса камиллашыуҙы күҙ уңында тотабыҙ:**

-Интеллектуаль йүнәлеш (Аллаһы Тәғәлә бәйғәмбәренең тормошо һәр быуын вәкилдәре өсөн өлгө);

-Рухи йүнәлеш (Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешеү, уның берҙән-бер булыуын таныу);

-Профессиональ йүнәлеш ("Үҙ эшен белеп, оҫта һәм ышаныслы башҡарғанды Аллаһы Тәғәлә ярата", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр).

Эшҡыуар ирешелгән уңышын үҙенеке түгел, Аллаһы Тәғәлә бәрәкәте, уңышһыҙлығын үҙенеке итеп танырға тейеш. "Утта ереп баҙлаған тимерҙең матурлығын тимерҙең сифаты тип атама, ул бит ут ялҡынында шундайға әүерелә", тигән мәүләнә Йәләлетдин Руми. Шуға күрә үҙ эшеңдә ирешкән уңышыңды, туплаған белемеңде үҙеңдеке тип атама, улар бит Аллаһы Тәғәләнең һиңә биргән бүләге.

Эшҡыуар башҡаларға өлгө булырға, уңышһыҙлыҡҡа осраһа, күңелен төшөрмәҫкә, кәрәк саҡта ҡаты ихтыяр ҙа күрһәтергә тейеш. Ысын эшҡыуар - ул башҡалар өсөн ҡайғыра белә, ярҙамсыл, фиҙаҡәр, уға көнләшеү һәм яһиллыҡ хас түгел. Ошо сифаттарға эйә булып, беҙ үҙ һаулығыбыҙҙы һаҡларға, бушты-бушҡа ауҙармаҫҡа, үҙебеҙҙе тормош өсөн бер ваҡытта үлмәҫтәй, әхирәт өсөн иртәгә донъя ҡуйырҙай тойоп хеҙмәт итергә бурыслыбыҙ. Алынған йөкләмәбеҙҙе, бер кемгә лә ышанмайынса, ваҡытында үтәү фарыз, сөнки ҡасан үлерен бер кем дә белмәй. Эшҡыуарҙың хеҙмәткә ынтылышы уның бурысы һәм ғибәҙәте булып һанала. Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә шулай ти: "Намаҙ уҡығас, ер буйынса таралығыҙ һәм Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәте хаҡына сәбәп ҡылығыҙ". "Хәләл табыш эҙләү мосолмандың бурысы", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр. Шуға күрә мин һеҙҙең барығыҙҙы ла Исламға өйрәнергә, Ислам принциптары буйынса эш итергә, киләһе быуындарҙы Исламда тәрбиәләргә саҡырам.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, киләсәктә башҡорт эшҡыуарын мин профессиональ һәләттәргә эйә, әүҙем хәрәкәт итеүсе, Ислам ҡанундары буйынса йәшәүсе кеше итеп күрәм. Ислам беҙгә дөрөҫ юлдан барыу өсөн дөйөм йүнәлеш табырға, киләсәгебеҙҙең дөрөҫ нигеҙен һалырға ярҙам итеренә иманым камил. Шул уҡ ваҡытта беҙгә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ошо һүҙҙәрен дә һәр саҡ иҫтә тотоу фарыз: "Ысын байлыҡ - ул күңел байлығы". Ябайлаштырып әйткәндә: беҙ эшләп тапҡан байлыҡ үҙебеҙҙеке түгел, ә Аллаһы Тәғәләнең беҙгә ышанып тапшырған мөлкәте һәм беҙ уны үҙебеҙҙең халҡыбыҙ мәнфәғәтенә файҙаланып, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тейешбеҙ. "Тик тән, матди һәм күңел бысраҡлығынан таҙартылған байлыҡ ҡына табыш була ала, ә табышын йәшергән кеше унан ҡолаҡ ҡаға", тип әйтелә "Аш-Шамс" сүрәһендә. Әйҙәгеҙ, йәмәғәт, Ислам ҡанундары буйынса табышлы эшләп, бәхеткә өлгәшәйек һәм халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалайыҡ!

**Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ.**

*Башҡорттар араһында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр аҙ. Әлбиттә, дәүләт яғынан был юҫыҡта ойоштороу һәм ярҙам итеү кәрәк. Бигерәк тә халҡыбыҙҙың ғәҙәти кәсептәрен тергеҙеү отошло булыр ине. Урал арьяғы төбәгендә, төньяҡ-көнсығышта сәнәғәт предприятиелары юҡҡа иҫәп. Сәнәғәт үҫешмәгән райондарҙа халҡыбыҙ цивилизациянан артта ҡалып йәшәй. Шул уҡ ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү предприятиелары төҙөүгә дәүләт инвестицияларын йәлеп итеү хаҡында һүҙ башлау кәрәк. Малсылыҡ менән шөғөлләнәбеҙ, ә уны сәнәғәти предприятиелар менән тулыландырыу хаҡында уйламайбыҙ.*

*"Башҡорт халҡына мөрәжәғәт"тән.*

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Намыҫыңа ҡаршы барма

"Кешенең бүтәндәр был турала белмәйәсәгенә иҫәп тотҡан сағындағы ҡылыҡ-ғәмәлдәре уның ысын холоҡ үлсәме булып тора", - ти Томас Маколей. Был осраҡта кеше тулыһынса үҙенә һәм бүтәндәргә ҡарата ғәҙел була аламы? Әллә ул алдаша һәм урлаша башлармы? Әгәр ҙә һинең ғәмәлдәрең һәр ваҡыт кешеләрҙән йәшерен булып ҡалһа, һин ни эшләр инең, бының менән нисек йәшәр инең? Әгәр ҙә аҡса тулы көшөлөк тапһаң, уны хужаһына тапшырыр инеңме? Беҙҙең намыҫ дуҫыбыҙ һәм идара итеүсе ҡарашыбыҙ булырға тейеш. Ул беҙ нимәнелер яңылыш эшләргә йыйынғанда йәки бүтәндәргә ҡарата тыуған хәүеф тураһында иҫкәртергә тейеш. Намыҫына ҡолаҡ һалмаған кеше үҙенең иң яҡшы дуҫын һәм тормош юлында идара итеүсе ҡарашын юғалта.

Кешенең ысын холоҡ үлсәме "әгәр был турала бер кем дә белмәһә, ул ни эшләр ине" тигән шарт менән билдәләнә икән, уның был ғәмәлен бары тик үҙе һәм бер Аллаһ ҡына ғәҙел баһалауға һәләтле. Әгәр ул үҙенең ғәҙел йәшәүен белеп, көн һайын көҙгөгә ҡарап торһа, ул шундуҡ был торошоноң сағылышын күрә алыр ине. Уның холоҡ булмышы йөҙөнә яҙылған була.

Беҙ бала саҡта намыҫ ҡушыуы буйынса эшләргә тырышып, үҙебеҙҙең холҡобоҙҙо төҙәтә инек. Әлбиттә, ҡайһы саҡта нимәнелер яңылыш эшләп тә йәшереп ҡалған саҡтарыбыҙ ҙа булғылай. Шулай уҡ һыуҙан ҡоро сыҡҡан осраҡта ла ғәйебебеҙҙе танып, көнө буйы выждан ғазабы менән йәшәлә. Ошолай һәр ваҡыт холҡобоҙҙағы ярыҡтарҙы киңәйткән һайын, үҙебеҙгә ҡарата баһабыҙҙы төшөрәбеҙ. Бынан беҙҙең ғорурлығыбыҙ һәм үҙеңә ҡарата дәрәжә тойғоһо зыян күрә. Үҙебеҙҙең ысын холҡобоҙҙо бары тик үҙебеҙ генә үлсәй алабыҙ һәм унда нимә иң мөһим ҡиммәт буласағы беҙҙең ихтыярҙа.

Тормош ҡайһы саҡта мораль һәм этик нормаларҙы боҙорға мәжбүр итә. Ҡайһы саҡта ниндәйҙер ҡыҫҡа ваҡытлы файҙа йәки проблеманы тиҙ генә хәл итеү өсөн иң юғары әхлаҡи нормаларҙан баш тартырға этәреүсе ылыҡтырғыс саралар килеп сығыуы ихтимал. Беҙ был аҙымға барабыҙ икән, тимәк, артабан алдашыуға, ауыртыныуҙарға һәм үҙеңә ҡарата ихтирам тойғоһон емереүгә илтеүсе юлға сығабыҙ, тигән һүҙ.

Һин үҙеңдең уй-ниәттәрең һәм йәшерен ғәмәлдәрең менән йәшәйһең һәм бары тик һин генә үҙеңдең намыҫ стандартыңды билдәләй алаһың. Шайтан ҡотҡоһо һине унан баш тарттырырға тырышып, тышҡы хәл-ваҡиғалар, дуҫтар, хеҙмәттәштәр, тормош иптәшең һәм хатта һинең эш биреүсең аша эш итә ала. Был көтмәгәндә килеп сыға һәм хатта ғәмәлгә ярашлы хәл булып күренеүе лә ихтимал. Быңдай осраҡта һиңә үткәнгә боролоп ҡарап, үҙеңә: "Ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерерҙәй ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләнемме?" тигән тигән һорауға яуап бирергә кәрәк. Һинең хәрәмләшкәнеңде, бәлки, бер ҡасан да бер кем дә белмәҫ, әммә һин үҙең беләһең бит! Ошо хәл үҙеңдең ҡылыҡ-ғәмәлдәрең менән йә ғорурлана алыуыңды, йә был осраҡта ғәҙелерәк булырға кәрәклегеңде аңлап, һәр ваҡыт выждан тойғоһо кисереүеңде билдәләй ҙә инде.

Һинең тормошоң йәшерен эштәреңдә асыҡлай. Әгәр һин һәр ваҡыт этик принциптарға тоғро ҡалаһың икән, һинең намыҫың һәр эштә лә уңышҡа өлгәшеүгә саҡырып тороусы маяҡ булып торасаҡ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 14 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 Мультфильм
06.20 "Отряд особого назначения". Приключенческий фильм
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.10 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.10 "Фазенда"
12.50 "Севастопольские рассказы"
13.40 "Большой финал"
15.30 "Внеземной". Драма
17.30 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Нидерландов - Сборная Дании
19.30 "Мистер Трололо". Творческий вечер Эдуарда Хиля
21.00 Время
22.00 "Мульт личности"
22.30 "Маленькая мисс счастье". Комедия
00.30 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Италии - Сборная Парагвая
00.30 "Калифрения". Сериал
02.30 "Век помрачения"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.20 "Гараж". Трагикомедия
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.40 "Утренняя почта"
09.10 "Потапов, к доске!" Фильм детям
11.00 "Вести"
11.20 "Вести-Башкортостан"
12.00 "Служанка трех господ". Лирическая комедия
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 Юбилейный концерт Кима Брейтбурга
17.15 "Тарас Бульба". Драма
20.00 "Вести недели"
21.05 "Ванька Грозный". Комедия
23.00 "Мистер и миссис Смит". Боевик
01.25 "Анализируй то". Комедия
03.25 "Комната смеха"

### НТВ

06.25 "Свободная от мужчин"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Приключения Десперо"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Следствие вели..."
11.10 "Правила угона". Криминальный сериал
13.00 "Сегодня"
13.20 "Правила угона". Сериал
16.00 "Сегодня"
16.20 "Правила угона". Сериал
19.00"Сегодня"
19.20 "Учитель в законе". Боевик
21.15 "Мент в законе. Охота на авторитета". Сериал
01.10 "Идентификация Борна". Триллер
04.50 "Теория большого взрыва"

### БСТ

**08.00 "Доброе утро!" Концерт**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.25 "Погода"**
**10.30 Мультфильм**
**10.45 "Фильм-детям"**
**11.55 "Автограф". Т. Гарипова**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**14.50 Художественый фильм**
**16.35 "Обряды"**
**17.20 Мультфильм**
**17.40 "Концерт мастеров искусств"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Сельский час"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Я помню..." Шайхинур Мирсаев.**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Спортивный интерес"**
**22.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 15 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
16.000 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Федеральный судья"
18.20 "След". Сериал
19.00 "Жди меня"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Кот-Д'Ивуара - сборная Португалии. Прямая трансляция из ЮАР (в перерыве - "Вечерние новости")
22.00 Время
22.30 "Ермоловы", 21-я серия. Сериал
23.30 "Московская сага", 7-я серия
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Кремль-9. За кулисами визита". Док. фильм "Горожские пижоны"
01.50 "Калифрения"
02.20 "Американская семейка"
02.50, 03.05 "12 дней страха"
03.00 Новости
03.30 "Полиция нового Орлеана"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Дворик", 73-я серия
18.05 "Ефросинья", 82-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Детективное агентство "Иван да Марья". "Дело о параллельных мирах". Сериал
22.550 "Стаханов. Забытый герой". Док. фильм
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Бразилия - КНДР. Прямая трансляция из ЮАР
02.30 "Честный детектив"
03.05 "Зло бессмертно"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Учитель в законе. Продолжение", 1-я и 2-я серии
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Главный герой представляет"
00.20 "Главная дорога"
00.55 "Школа злословия"
01.45 "Танцуй с ним". Драма
04.05 "Особо опасен!"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Лица времени"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.20 "Автограф". Т. Гарипова. Передача 2-я**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Ностальгия..."**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 "Дочь Иремели". Г. Галеева**
**16.15 "Родные напевы". Гала-концерт. 2-я часть**
**17.15 "Виктория"**
**18.10 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Язмыш". Программа Магнитогорского ТВ**
**21.00 "От истоков к будущему". Бурзянский район**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 16 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Ермоловы", 22-я серия
22.30 "Московская сага", 8-я серия. Сериал
23.30 "Среда обитания"
00.30 "Ночные новости"
00.50 "Калифрения"
01.50 "Американская семейка"
02.40, 03.05 "Поспешишь - людей насмешишь"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Цена звездной роли"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2". Сериал
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 74-я серия
18.05 "Ефросинья", 83-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.45 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Детективное агентство "Иван да Марья". "Дело о беглецах и преследователях"
22.50 "Белый цыган. Мстислав Запашный". Док. фильм
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. ЮАР - Уругвай. Прямая трансляция из ЮАР
02.30 "На семи ветрах"
04.30 "Городок"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Учитель в законе"
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.25 "Контакт". Фантастика
03.20 "Особо опасен!"
04.20 "Девять месяцев из жизни-2"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 13.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Виктория"**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.20 "Сказка странствий". Э. Мулдашев**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Судьбы радужные нити"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык"**
**16.10 "Тивлет"**
**16.35 "Аркаим"**
**17.20 "Виктория"**
**18.10 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Праздник народной души"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Хрустальный соловей-2010"**
**23.50 Художественный фильм". По окончании: погода**

## 17 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Греции - сборная Нигерии ( в перерыве - Вечерние новости)
22.00 Время
22.30 "Ермоловы", 23-я серия
23.30 "Человек и закон"
00.20 "Ночные новости"
00.40 "Калифрения"
01.10 "Американская семейка". Сериал
01.40, 03.05 "Реклама для гения". Мелодрама
03.00 Новости
03.40 "Полиция нового Орлеана"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2". Сериал
13.40, 04.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 75-я серия
18.05 "Ефросинья", 84-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Детективное агентство "Иван да Марья". "Дело о черном маскараде". Сериал
22.50 "Детектор лжи. Жесты". Док. фильм
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Франция - Мексика
02.30 "Обещание"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Учитель в законе"
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Мороз по коже". Триллер
01.25 "Пурпурный дождь". Мелодрама
03.35 "Особо опасен!"
04.15 "Девять месяцев из жизни-2"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.25 Мультфильм**
**13.00, 19.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 "Наш дом - Башкортостан"**
**17.15 "Виктория"**
**18.15 "Учим башкирский язык"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.30 "Исторический Башкортостан"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "На страже закона"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "От Ика до Яика"**
**23.35 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 18 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хорошо сидим". Комедия
16.30 "Федеральный судья"
17.30 Вечерние новости (с субтитрами)
18.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Германии - сборная Сербии
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.25 "Розыгрыш"
22.40 "Обмани меня". Сериал
23.40 Открытие 32-го Московского Международного кинофестиваля
00.30 Чемпионат мира по футболу 2010. Сборная Англии - сборная Алжира
02.30 "Присяжная". Триллер
04.40 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 76-я серия
18.05 "Ефросинья", 85-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Детективное агентство "Иван да Марья". "Дело о ласковом море"
22.55 "Девчата"
23.50 "Путешествие автостопом". Драма
01.40 "Аферисты"
03.25 "Черное рождество"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Учитель в законе. Продолжение"
21.30 "День отчаяния". Криминальная драма
23.30 "Женский взгояд" Оксаны Пушкиной"
00.15 "Елизавета. Золотой век". Мелодрама
02.20 "Мертвая тишина"
04.05 "Девять месяцев из жизни-2"
04.55 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Телекомпас"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.55 "Виктория"**
**17.45 "Йома"**
**18.10 "Новости" (на башк. яз)**
**18.35 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Первенство России по футболу. Второй дивизион. "БИС-Динамо" (Уфа) - "Носта" (Новотроицк). Прямая трансляция. В перерыве - "Сэнгелдэк"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Историческая среда"**
**23.40 "Криминальный спектр"**
**00.05 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 19 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Инспектор уголовного розыска"
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Наталья Селезнева. С широко раскрытыми глазами"
12.10 "Юрий Соломин. Я всегда прав"
13.10 "Как украсть миллион". Комедия
15.20 "Госпожа горничная". Романтическая комедия
17.30 Чемпионат мира по футболу 2010. Сборная Нидерландов - сборная Японии. Прямая трансляция из ЮАР
19.30 Новый "Ералаш"
20.00 "Кто хочет стать миллионером?"
21.00 "Время"
21.15 "Миссия невыполнима-3". Боевик
23.30 Дневник 32-го Московского Международного кинофестиваля
23.40 "Последний король Шотландии". Драма
01.50 "Любимцы Америки"
03.50 "Вооружены и опасны"
05.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.25 "Сувенир для прокурора". Детектив
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести - Башкортостан"
08.20 "Субботник"
09.00 "Баранкин, будь человеком!"
09.20 "Волшебный портрет". Сказка
11.00 "Вести"
11.10 "Вести - Башкортостан"
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостан"
14.30 "Вокзал для двоих". Лирическая комедия
17.10 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
18.05 "Субботний вечер"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Путь домой". Драма
22.25 "Граф Монтенегро". Комедия
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Камерун - Дания. Прямая трансляция из ЮАР
02.30 "Мажестик". Мелодрама
05.25 "Городок"

### НТВ

05.50 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город Земли"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Суд присяжных: главное дело"
17.55 "Очная ставка"
18.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео: "Смертельное оружие-2". Боевик
00.55 "Ганнибал". Триллер
04.05 "Девять месяцев из жизни-2"
04.55 "Скорая помощь"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.05 "Советы садоводам"**
**10.35 "Волшебный курай"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.10 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**11.45 "Желтые ботинки". Фестиваль джазовой музыки**
**12.15 А. Хусаинов. "Бэндэбикэ и Ерэнсэ сэсэн". Спектакль Стерлитамакского Государственного башкирского театра драмы**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 "Дарю песню"**
**15.55 "Футбол без границ"**
**18.00 "Книга мастеров"**
**18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Династии"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На сон грядущий"**
**22.45 "Урал моно-2010"**
**00.15 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 20 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Жил-был доктор..."
07.50" Служу Отчизне!"
08.20 Дисней клуб"
09.10 "Здоровье"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.20 "Призвание". Премия лучшим врачам России. Юбилейная церемония
14.20 "Отель "У погибшего альпиниста". Детектив
15.50 "Новый "Ералаш"
16.20 "Спецрасследование"
17.30 Чемпионат мира по футболу 2010. Сборная Словакии - сборная Парагвая
19.30 Фильм
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Я лечу над Россией". Вечер памяти Людмилы Георгиевны Зыкиной
00.10 Дневник 32-го Московского Международного кинофестиваля
00.30 Чемпионат мира по футболу 2010. Сборная Бразилии - Сборная КотД Ивуара
02.30 "Спасатель". Приключения

### РОССИЯ 1

05.55 "Женитьба Бальзаминова". Комедия
07.35 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
08.05 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
08.55 "Маленькие гиганты". Семейная комедия
11.00 "Вести"
11.10 "Вести - Башкортостан". События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Молчун". Мелодрама
14.00 "Вести"
14.20 " Вести - Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.0 "Смеяться разрешается"
17.45 "Юбилейный концерт Олега Газманова"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Вдовий пароход". Драма
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Мы - одна команда". Драма
02.45 "Убийство в "центре Америки". "Черная" комедия

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.50 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.20 "Дорогой мой человек". Мелодрама
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "И снова здравствуйте!"
17.20 "МАсквичи"
18.15 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.45 "Бульдог-шоу"
21.30 "Огонь из преисподней". Боевик
23.35 "Авиаторы"
00.05 "Дело "Пестрых"
02.05 "Сладкий ноябрь"
04.20 "Девять месяцев из жизни-2"
05.10 "Скорая помощь"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.05 "Ребятам о зверятах"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Артылыш"**
**13.00 "Урал-моно-2010". Гала-концерт**
**14.35 "Дарю песню"**
**15.45 "Быстрее, выше, сильнее"**
**16.20 "Салям"**
**16.40 "Дарю песню"**
**17.45 "Салауат йыйыны-2010"**
**19.50 "В центре внимания"**
**20.10 "Байык"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.45 Погода**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**


**Самарский филиал ОАО "Железнодорожная торговая компания" г. Самара , ул. Буянова, 13 проводит торги в форме аукциона по продаже недвижимого имущества**

- **Здание кафе** общей площадью **729,1 кв.м** и соответствующий земельный участок общей площадью **996 кв.м.**, расположенный по адресу: **Российская Федерация, Республика Башкортостан, г.Уфа, Орджоникидзевский р-н, ул. Свободы, д. 78.**

Заявки и документы на участие в аукционе принимаются с момента выхода объявления до **"8" июля 2010 г. 17-00 часов** (местного времени) по адресу: **Российская Федерация, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Ленина, д. 124. Тел.: (347) 229-17-06, 229-19-90. Трофимова Инна Игоревна.**

К участию в Аукционе допускаются физические лица, юридические лица и индивидуальные предприниматели без образования юридического лица, подавшие в установленные сроки надлежащим образом оформленные заявки на участие в Аукционе.

Начальная цена продажи Объекта - **13 515 595** (Тринадцать миллионов пятьсот пятнадцать тысяч пятьсот девяносто пять) рублей с учетом НДС, в том числе стоимость земельного участка **10 436 507** (Десять миллионов четыреста тридцать шесть тысяч пятьсот семь) рублей без учета НДС.

Величина повышения начальной цены " шаг аукциона" составляет 5% - **675 780** рублей (Шестьсот семьдесят пять тысяч семьсот восемьдесят), с учетом НДС.

Размер задатка вносимый претендентом на основании договора о задатке составляет 10% от суммы начальной цены продажи Объекта - **1 351 560** рублей (Один миллион триста пятьдесят одна тысяча пятьсот шестьдесят рублей).

Аукцион состоится **"14" июля 2010г. в 15-00 часов** (местного времени) по адресу: **Российская Федерация, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Ленина, д. 124.**

С участником, выигравшим Аукцион, в течении 10 дней со дня получения извещения о признании его победителем подписывается договор купли-продажи

Конкурсная документация для участия в аукционе может быть получена на сайте **www.rwtk.ru** или по адресу: **Российская Федерация, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Ленина, д. 124, тел.: (347) 229-17-06, 229-19-90.**

✓ **"Йәшлек-шоу"ҙы еңел-елпе йырҙар конкурсына әйләндереп, хәҙер шул кимәлдәге башҡарыусыларҙы Халыҡ-ара кимәлдә үткән конкурсҡа алып сығыуыбыҙ көлкө лә, ғәрлек тә тыуҙыра.**

*АҒЫ ЛА БАР, ҠАРАҺЫ ЛА...*

**Барыбер ҙә ҡоштар донъяһы кешеләргә ҡарағанда ғәҙел һәм аҡыллыраҡтыр ул. Һәр береһе "Үҙ өйөмдә - үҙ көйөм" тип, үҙ ағасында үҙенсә көй һуҙып, йә булмаһа, өн сығарып көн итеүен белә. Ҡарға ереклектә ҡарҡылдаһа, турғай ҙа һандуғас менән йәнәшә ултырып һайрамай, сөнки үҙенең нимәгә һәләтле булыуын яҡшы белә. Шул уҡ ваҡытта күпме генә турғай өйөрө бергә ҡушылып сырҡылдашмаһын, уны бер кем дә мең төрлө тауышҡа һайраған һандуғастан өҫтөн ҡуйырға баҙнат итмәй. Ҡалабыҙҙа булып үткән "Урал моңо - 2010" төрки йәштәренең XV Халыҡ-ара конкурс-фестивален ҡарағандан һуң ошо сағыштырыуҙарға мөрәжәғәт иттем.**

# КЕМДЕР УРЫН АЛДЫ,

## кемдер халыҡ һөйөүен яуланы

Республикабыҙҙа йәштәр араһында үткәрелгән ижади сараларҙан "Урал моңо"н айырыуса көтөп алам. Бында туғандаш халыҡтарҙың мәҙәниәте, сәнғәте менән танышыу, уларҙың көй-моңдары аша милләт һулышын, уй-кисерештәрен, рухиәтен тойоу, үҙебеҙ менән сағыштырып ҡарау өсөн ерлек етерлек була. Ҡатнашыусылар үҙҙәре лә бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлаша, яңы ижади алымдар менән бүлешә, илһамға әйҙәүсе хис-тойғолар, уй-фекерҙәр яңырталыр, тим. Һәр хәлдә, мин үҙем ситтән килгән ҡатнашыусыларҙың көслө, сағыу сығыштарынан йәшен йәшнәүенән тетрәнә-тетрәнә ямғыр һыуын үҙенә һеңдереп ҡалырға тырышҡан ер ише кинәнес кисерәм.

Йыр-моң өсөн тел айырмалығы кәртә булып тора алмай бит. Әгәр ул йөрәктән сығып юғары кимәлдә башҡарыла икән, һәр кем күңеленә юл табыуға һәләтле. Бигерәк тә йыр һәр халыҡтың үҙенә генә хас милли үҙенсәлеге менән һуғарылған икән, ул тағы ла көслөрәк тәьҫир итә. Мәҫәлән, ҡарасәй-черкес егете Суфел Багдадиҙың дәртле, ялҡынлы сығышы бөтә залды йәнләндереп ебәрһә, чечен ҡыҙы Раида Йосопованың бейеү менән тулыландырылған йырын тамашасы күтәреп алды. Шулай уҡ Тыванан килгән Айдамир Синглдың өзләүенә бер кем дә битараф ҡала алманы. Ә Саха (Яҡутстан) ҡыҙы Юлиана Кривошапкинаның үҙенсәлекле сығышын халыҡ өс көн буйы алҡыштар менән ҡаршы алып, "браво" ҡысҡырып оҙатып ҡалды. Был нәзәкәтле ҡыҙҙың шундай көслө тауыштар сығарыу һәләтенә хайран ҡалмаған кеше ҡалмағандыр. Минә ҡалһа, "Урал моңо" тап ошондай милли балҡыш, ижади эҙләнеү, һәләт үҙенсәлектәрен яҡтыртыу өсөн майҙан булып торорға тейеш. Ҡатнашыусы эстрада йыры менән сығыш яһағанда ла, хатта ул йыр мөхәббәт тураһында барһа ла, беҙ милли сағылышты тойомлай алырға тейешбеҙ.

Һәр нәмә сағыштырыуҙарҙа күренә бит. Башҡортостан исеменән сығыш яһаусылар ни өсөндәр ошо юғарылыҡты яулай алмай, ситтән килгән иң-индәр араһында юғалып ҡала ла ҡуя. Ниміһе ҡыҙыҡ: беҙ үҙебеҙ үк ҡуйған талаптарға яуап бирерҙәй, республикабыҙҙың милли йөҙөн танытырҙай, милли асылыбыҙҙы сағылдырырҙай башҡарыусыларҙы сығара алмайбыҙ был бәйгегә. Ни өсөндөр, һәр юлы бер үк хаталар ҡабатлана. Беренсенән, ҡатнашыусыларҙы һайлап ала белмәйбеҙ, икенсенән, уларҙы алдан әҙерләмәйбеҙ. "Каруанһарай" егеттәренә, Юнир Һағынбаевҡа дөрөҫ йыр һайлап, нығыраҡ әҙерләгәндә, бынамын тигән итеп балҡыта ала инек Башҡортостанды. Үҙебеҙ ойошторған конкурстың үҙебеҙ үк кимәлен төшөрә барыуыбыҙ ғәжәпләндерә. Ойоштороусыларҙың матбуғат сараларында әйтелгән тәнҡит-кәңәштәренә ҡолаҡ һалмауынан да киләлер был. "Йәшлек-шоу"ҙы еңел-елпе йырҙар конкурсына әйләндереп, хәҙер шул кимәлдәге башҡарыусыларҙы Халыҡ-ара кимәлдә үткән конкурсҡа алып сығыуыбыҙ көлкө лә, ғәрлек тә тыуҙыра. Башта әйтеп үткәнемсә, һәр кем үҙ урынын белергә тейеш.

Һәм тағы ла конкурс положениеһының үҙ көсөндә булмауы ла аптыратты. Унда алдағы йылдарҙа үткәрелгән конкурста лауреат исеме яулғандар конкурста ҡатнаша алмай, тип яҙылған. Ә беҙ 2008 йылда үткән конкурста өсөнсө урын алған "Бельбек" төркөмөнөң (Ҡырым автономлы республикаһы) был юлы Гран-при алыуына шаһит булдыҡ. Әгәр беҙ ҡатнашыусыларҙы һәләттәренә түгел, ә ҡайҙан һәм кем булыуына ҡарап баһалайбыҙ икән, конкурс үҙенең тәүмаҡсатынан тайпылды, тигән һүҙ. Улайға китһә, Дағстан тиклем ерҙән бер ҡулына йәш балаһын, икенсе ҡулына гитараһын йөкмәп килгән Айнара Толубаеваға ла берәй урын бирергә ине, исмаһам, күңеле үҫеп ҡайтыр ине йәш ижадсының. Ғәҙелһеҙлек хөкөм һөргән ерҙә ихласлыҡҡа урын ҡалмай ул. Ә был конкурс дуҫтарса мөнәсәбәткә ҡоролған ысын йыр-моң байрамы булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр кем үҙе теләгән баһаны алды: кемгә дан, исем кәрәк - ул уны үҙ юлдары менән хәстәрләне, кемгә халыҡ һөйөүе мөһим, ул үҙенә тейешлеһен ҡабул итте. Урын яулап кем нимә иҫбатлағандыр, әммә халыҡ фекере башҡаса. Миңә ҡалһа, иң ҙур баһаны Саха ҡыҙы Юлиана Кривошапкина алып ҡайтты. Үҙебеҙҙең башҡарыусылар араһында ла урындар бүтәнсәрәк билдәләнгәндер, тим. Ә халыҡ һөйөүенән дә юғарыраҡ баһа юҡ. Шулай булғас, кем еңеүсе инде?**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Зөһрә МӨХӘМӘТОВА, хужабикә:**

- Ҡәрҙәшлек һәм дуҫлыҡ байрамы булған "Урал моңо"нан күпте көтөлгәйне. Әммә быйылғы конкурс бик күп һорауҙар тыуҙырҙы. Республикабыҙҙа үткән иң сағыу сараларҙың береһе булған "Урал моңо"н тышҡы ялтырауыҡҡа ғына күмелгән шоуға әүрелдермәһендәр ине. Ситтән килгән йырсыларҙы тыңлаған ваҡытта йөрәк күкрәк ситлектәренә һыймай дарҫлап тибә башлай, күҙгә йәштәр килеп тығыла. Тик ни өсөндәр үҙебеҙҙең башҡарыусылар ошондай юғарылыҡты алдыра алмай, уларҙың сығышын балҡытыусы бер осҡон етешмәй.

Миңә ҡалһа, еңеүселәрҙең урындары ла ғәҙел билдәләнмәне. Бәлки, беҙ, ябай тамашасы, музыканы профессиональ кимәлдә аңлап та етмәйбеҙҙер, әммә мондо тойомлау халыҡта көслөрәк. "Урал моңо" халыҡсан конкурс, тимәк, халыҡ фекере иҫәпкә алынырға тейеш. Ә быны тамашасының ҡайһы ҡатнашыусыға нисек ҡул сабыуына ҡарап та аңларға мөмкин ине.

**Әлиә ХӘКИМОВА, эшҡыуар:**

- Нисек кенә үкенесле булмаһын, бөтөн төрки донъяһын, төрки телле туғандаш халыҡтарҙы берләштереүсе сараларҙың береһе булған "Урал моңо" фестиваленең йылдан-йыл баһаһы һәм бәҫе төшә барыуын танымай булдыра алмайбыҙ. Уның абруйын, йәмен ҡатнашыусылар, баһалаусылар һәм, әлбиттә, өндәшмәй ҡалыуыбыҙ менән беҙ, тамашасылар, үҙебеҙ ебәрәбеҙ түгелме һуң? Быйыл фестивалдең ике турын да ҡарарға насип булды. Кемдең кем икәне, нимәгә һәләтле булыуы беренсе көндә үк күренгәйне инде, эстән генә Гран-приға лайыҡлы йырсыны ла билдәләп ҡуйылғайны...

Халыҡта "ҡаратырыш" тигән һүҙбәйләнеш бар. Артыҡ һәләте булмаһа ла, ана шул тырышлығы арҡаһында уңышҡа өлгәшкәндәргә ҡарата әйтәләр уны. Юғары исемдәр, исмаһам, үҙ өҫтөндә даими эшләгән, үҙенең һәләтен үҫтергән ҡаратырыштарға бирелһә ине. Ике йылға бер тапҡыр уҙғарылған фестивалдә Башҡортостан данын яҡлап сығыш яһарлыҡ йырсылар юҡ түгел беҙҙә, тик улар ғәҙел булмаған баһаларҙан үҙен өҫтөнөрәк ҡуя, шуға ла фестивалдә ҡатнашырға теләмәй, һәм дөрөҫ эшләй ҙә. Әгәр ҙә артабан да ошо етешһеҙлектәргә сик ҡуймаһаҡ, халыҡ-ара фестиваль "Һылыуҡай", "Йәшлек-шоу" кеүек еңел-елпегә ҡоролған конкурстар кимәленә төшөп, сәнғәт һөйөүселәрҙә бары тик көлкө тыуҙырыусы сараға әйләнәсәк.

**Гөлсәсәк САБИТОВА, музыка уҡытыусыһы:**

- Конкурс бик оҡшаны. Тик тәүге көндәрҙә ҡарай алмағас, барыһын да тыңлау мөмкинлеге булмауы үкенес. Гала-концертҡа бөтә ҡатнашыусыларҙы ла сығарһындар ине, программа ҙурыраҡ булһын ине, тигән теләктәмен. Миңә барыһынан бигерәк Юлиана Кривошапкина, ҡаҙаҡ егете Бекзат Оспанов оҡшаны. Ә Башҡортостан исеменән сығыш яһаусылар араһынан "Арғымаҡ" этнорок төркөмө өсөн тауыш бирер инем. Шулай уҡ "Каруанһарай" егеттәренә урын бирелмәне, улар ҙа матур сығыш яһағайны.

**Ләйсән АБДУЛЛИНА, менеджер:**

- Миңә ҡалһа, был конкурста яңы һәм көслө тауыштар менән башҡарылған тәрән мәғәнәле халыҡ йырҙарын, йә фольклор әҫәрҙәр яңғырарға тейеш. Ул йырҙарҙы тыңлағанда бар йөрәгең менән "афарин" тип ҡысҡырып ултырырлыҡ булһын. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был юлы "Урал моңо"нан көткән өмөттәр аҡланманы. Был конкурсты шоуға әйләндерергә ярамай, уның өсөн бүтәнсә саралар бар. Ойоштороу яғына килгәндә, әлбиттә, барыһы ла һәйбәт эшләнгән, тик бына еңеүселәргә урындарҙың дөрөҫ билдәләнмәүе менән генә килешеп етмәнем. Жюри ағзалары был ҡарарҙары менән нимә әйтергә теләне икән? Миңә ҡалһа, тамашасы фекеренә лә бер аҙ ҡолаҡ һалырға кәрәк. Әгәр халыҡ былдай сараларҙан биҙерәй башлай икән, "Урал моңо" ла булмаясаҡ бит. Быйылғы ҡатнашыусыларҙан миңә Саха (Яҡутстан) һәм Ҡаҙағстандан килгән башҡарыусылар оҡшаны. Ә беҙҙең Юнир Һағынбаевҡа ла маҡтау һүҙҙәре әйтер инем.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**



✓ - Зирәклек, әйтсе, ниндәй сал сәсле ҡарт мине ҡотҡарҙы? - тип һораған ул уйсан Зирәклектән. - Һине Ваҡыт ҡотҡарҙы, Мөхәббәттең ҡиммәтен һәм ҡәҙерен Ваҡыт ҡына аңлай ала шул... - тип яуаплаған ул.



СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ҺИРӘК ЯҢҒЫРАҒАН ЙЫРҘАР БАЙЫТТЫ

## "Ирәндек моңдары"н




**27-29 майҙа Сибай ҡалаһында X Төбәк-ара "Ирәндек моңдары" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсы үтте. Унда Өфө, Сибай, Салауат, Күмертау, Учалы, Баймаҡ һәм республиканың 17 районынан, шулай уҡ Мәскәүҙән, Татарстандан, Ҡурған һәм Силәбе өлкәһенән йөҙҙән ашыу ҡатнашыусы йыр-моңға маһирлығын һынаны. Конкурс тураһындағы тәьҫораттары менән уның сценарий авторы сәсәниә Асия ҒӘЙНУЛЛИНА уртаҡлашты:**

- Быйыл унынсы тапҡыр үткән "Ирәндек моңдары" фестивален бик мөһим сара итеп ҡабул иттек һәм ныҡлы әҙерләндек. Конкурс Сибай ҡалаһының 55 "йәшенә" һәм Республика йылына ла арналды. Ирәндек менән Ирәмәл араһында ятҡан Сибайҙа, алтын һырттар буйлап халыҡтың көмөш тауышлы иң аҫыл йыраусылары сыҡҡан ерҙә үткәрелгән фестиваль быйыл "Ҡуңыр буға әйҙәр бәйге" тип аталды.

"Ирәндек моңдары" йыр бәйгеһенең шәжәрә ағасын эшләнек. Уның тамырын Буранбай, Ғәбит сәсәндәр, Ғата Сөләймәнов, Кәрим Дияров, Юлай Ғәйнетдинов кеүек үҙебеҙҙең яҡтан сыҡҡан маһир йыраусылар, ҡурайсылар, Хөсәйен Әхмәтов, Рамаҙан Йәнбәков кеүек арҙаҡлы композитор һәм йырсылар тәшкил итә. Йырсылар шәжәрәһе ағасының тәүге олононда фестивалдең тәүге еңеүсеһе Азамат Тимеров, артабан үҫә барып, туғыҙынсы олононда Хәйбулла районынан Сәйет Билалов исеме яҙылһа, шәжәрә ағасының яңы сыҡҡан олонона быйылғы еңеүсе - Диләрә Иҙрисованың исеме нарыҡланды. Ул был еңеүҙе башҡорт халыҡ йыры "Таштуғай" менән яуланы. Сарала ҡатнашыусы 55 бала араһынан Нуриман районы егете Раушан Хәлиловҡа етеүсе булманы.



Бәйге "Ирәндектә йыраусылар тыуы" тигән гала-концерт менән тамамланды. Байрамда башҡорттоң йыуан доңғорон, ҡулдағы дөңгөрҙө, көңгөр менән шөңгөрҙө күрһәттек, ҡумыҙ, думбыра көйөн яңғыраттыҡ. Иң төп урында, әлбиттә, ҡурай булды. Ә "Ҡуңыр буға" эпосынан өҙөктө Баязит Ғәйнуллин өҙләп башлап ебәрҙе лә ил инәһе ролендә Алһыу Бәхтиева дауам итте. Ошо юбилейға арнап, Илшат Яхин менән "Йыраусылар тыуы" тигән йыр ҙа ижад иттек. Әйтергә кәрәк, "Ирәндек моңдары" конкурсының йылдан-йыл ойоштороу кимәле яҡшыра бара, мәртәбәһе үҫә. Быйыл да ул яңы исемдәр, яңы тауыштар асыуы, һирәк яңғыраған йырҙар башҡарылыуы менән менән сағыу һәм иҫтәлекле булды.

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА
яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, ЯРЫШҠА!

# ҠУРАЙ БАЙРАМЫ САҠЫРА

**18-19 июндә Октябрьский ҡалаһында X Республика Ҡурай байрамы үтә. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендә ҡурайҙы пропагандалау һәм популярлаштырыу, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнау тардицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, һәләтле ҡурайсыларҙы асыҡлау - үҙенсәлекле фольклор фестивалененң төп бурыстары булып тора.**

Конкурс шулай уҡ профессиональ башҡарыусылар һәм коллективтар, традицион булмаған башҡарыусылар составы өсөн ҡурайҙың яңы мөмкинлектәрен асыуҙы ла маҡсат итеп ҡуя.

Байрамда яңғыҙ ҡурайсылар һәм ҡурайсылар ансамбле конкурсы үтә. Яңғыҙ ҡурайсылар конкурсы 16 йәшкә тиклемгеләр һәм 16 йәштән өлкәндәр араһында ике турҙа үтә. Ҡатнашыусылар тәүге турҙа үҙе һайлаған берәр оҙон һәм ҡыҫҡа көй, икенсе турҙа 16 йәшкә тиклемгеләр үҙҙәре һайлаған оҙон көйҙө, 16 йәштән өлкәндәр исемлеккә ингән оҙон көйҙө һәм ҡыҫҡа көй уйнап күрһәтергә тейеш. Ҡурайсылар ансамбле конкурсы ике йәш категорияһында бер турҙа үтә. Ансамблдәр бер оҙон көй һәм бер оҙон йәки ҡыҫҡа көй уйнарға тейеш. Конкурста ҡатнашыусылар традицион башҡарыу мәҙәниәтенә эйә булырға, үҙҙәре башҡарған көйҙөң тарихын, легендаһын белергә тейеш. Ҡурай байрамында ҡурайсылар һәм ансамбль етәкселәре өсөн ижади лаборатория үткәреү ҡаралған.


ИҒЛАН



Затон биҫтәһендә (СНТ "Озерный") 6х9 үлсәмле ике ҡатлы йорт һатыла йәки фатирға алыштырыла. Участка майҙаны 10 сотый, мунсаһы, емеш-еләкле баҡсаһы бар.
**8-919-159-01-71, Римма Яруллина.**

* * *

**12-13 июндә** Арҡайымға барырға һәм Баймаҡ районы Манһыр ауылына - Мөжәүир хәҙрәт ҡәберенә зыярат ҡылырға теләүселәрҙән төркөм йыябыҙ. Бәйләнеш өсөн телефон: 8-961-050-28-39.

* * *

**19-20 июндә** Учалы районы Әүеш тауында урынлашҡан шишмәгә һәм Троицк ҡалаһына Зәйнулла ишандың ҡәберенә барырға теләүселәрҙән төркөм йыябыҙ. Бәйләнеш өсөн телефон: 8-961-050-28-39.


АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МӨХӘББӘТТЕ...

## ваҡыт ҡына аңлай

**Борон-боронда бер утрауҙа бар кешеләрҙең тойғолары йәшәгән, ти. Елбәҙәк менән Һағыш, Зирәклек менән Наҙанлыҡ, Ғорурлыҡ һәм Аҙғынлыҡ, Муллыҡ менән Ҡомһоҙлоҡ. Улар менән бергә Мөхәббәт тә йәшәгән.**

**Бер заман утрау һыу аҫтына китә башлаған. Тойғолар тиҙ генә караптарына ултырып, утрауҙан ҡасыу яғын ҡараған. Мөхәббәт һаман ниҙер көткән, барыһы өсөн дә күктәрҙән ярҙам һорап, ялбарған.**

**Бына утрауҙан Мөхәббәт баҫып торған ҡалҡыулыҡ ҡына тороп ҡалған. Эргәнән Ҡомһоҙлоҡ менән Муллыҡтың ҙур, ҡупшы карабы йөҙә икән.**

**- Мине үҙегеҙ менән алығыҙсы, - тип үтенгән Мөхәббәт.**

**- Беҙҙең карап тулы алтын, көмөш, затлы әйберҙәр, һиңә урын юҡ шул, - тип яуаплағандар ҙа тегеләре, ары киткәндәр.**

**Ә һыу һуңғы ҡалҡыулыҡты ла күмеп етеп килә, ти. Бына ул Мөхәббәттең тубығынан бейегерәк булып күтәрелгән.**

**Елкәндәрен бейек күтәргән Ғорурлыҡтың карабы үтеп бара, ти.**

**- Алсы мине үҙең менән, - тип ялбарған Мөхәббәт.**

**- Минең карапта барыһы ла ҡаты тәртипкә буйһона, мин был тәртипте боҙһам, үҙемдең булмышыма хыянат итәсәкмен, - тип яуаплаған Ғорурлыҡ, Мөхәббәт яғына башын да бормай.**

**Һыу Мөхәббәттең биленә тиклем еткән.**

**- Елбәҙәк, Елбәҙәк! - тип ҡысҡырған Мөхәббәт, күңелле көй яңғыраған, төрлө таҫмалар менән биҙәлгән карапҡа.**

**Елбәҙәк менән Аҙғынлыҡ күңелле итеп бейешәләр, ти, Мөхәббәттең батып барғанын күрһәләр ҙә, байрамдарын туҡтатырға теләмәгәндәр.**

**Һыу муйынға етеп килә икән Мөхәббәттең. Янынан хөрт кенә кәмәлә Һағыш йөҙөп бара, ти.**

**- Һағыш, алсы мине... - тип илай башлаған Мөхәббәт.**

**- Урын юҡ шул, - тип моңһоу ғына башын сайҡаған Һағыш.**

**Һуңғы тапҡыр зәңгәр күккә, ҡояшҡа бағайым, тип, Мөхәббәт ҡарашын өҫкә төбәгән. Шул саҡ уны кемдер ҡапыл һыуҙан тартып сығарған. Сал сәсле ҡарт үҙенең етеҙ карабында Мөхәббәтте барыһынан да алдараҡ Ерғә алып барған. Мөхәббәт хатта унан исемен дә һорап өлгөрмәгән.**

**Бына бер ваҡыт Зирәклектең карабы күренгән.**

**- Зирәклек, әйтсе, ниндәй сал сәсле ҡарт мине ҡотҡарҙы? - тип һораған ул уйсан Зирәклектән.**

**- Һине Ваҡыт ҡотҡарҙы, - тип яуаплаған ул.**

**- Ваҡыт?**

**- Эйе, Ваҡыт. Мөхәббәттең ҡиммәтен, Мөхәббәттең ҡәҙерен Ваҡыт ҡына аңлай ала шул...**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 6167
Заказ 2297